ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

25-3 февраль - март (шаҡай - буранай) 2017

№8 (738)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иркекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Февраль башынан 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Кискe Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзанлыраҡ хаҡҡа яҙылыу иғлан ителә, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итә. Ә тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә (өс айға - 244 һум 70 тин).***


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бәйге тоттолар...**

шәп уҡытыусы тигәндe раҫларға



5

**Олуғ ғалимыбыҙ әйткән һүҙ,**

йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге



7

**Ҡурай ҡурайсыны үҫтерәме,**

әллә ҡурайсы ҡурайҙымы?



11

**Инсандар булайыҡ!**



13

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үҙ телеңдә һөйләшергә һиңә нимә ҡамасаулай?

***Марат ДӘҮЛӘТБАЕВ, Өфөләге "Мега" сауҙа үҙәге менеджеры:***

Эш урынындағы мөхит һәм вазифам ҡамасаулай, шулай әйтергә яраһа. Ҡала шарттарында барыбер үҙ телендә генә аралашыу мөмкинлеге сикләнгән, сөнки эш урынында - теләйһеңме, юҡмы - көнө буйы рус телендә аралашырға тура килә. Унын ҡарауы, өйгә ҡайтҡас, шулай уҡ дуҫтарым-таныштарым менән иркенләп башҡортса һөйләшәм. Эштә - фәҡәт русса, тиһәм дә, бер аҙ төҙәтмә индерергә тура килер: беҙҙең һатып алыусылар араһында ла төрлө кеше осрап тора. Миңә ҡайһы саҡ өлкән йәштәгеләрҙең күп уйлап тормай йә башҡортса, йә татарса өндәшеүе бик оҡшай (шулай булмай: кем икәнлегем йөҙөмә яҙылған да!) Өлкәндәргә генә хас ябайлыҡ менән улар теге йәки был тауарҙың үҙенсәлектәрен аңлатып биреүҙе йә ниндәйҙер башҡа берәй кәңәш һорайҙар. Бына шул саҡ мин улар менән рәхәтләнеп үҙ телемдә - башҡортса һөйләшеп китәм, бөтәһен дә аңлатып, тасуирлап бирәм. Был беҙҙең секция мөдире Галина Алексеевнаға ла оҡшай: "беҙҙең филолог"тип йөрөтә ул мине. Һатып алыусылар менән ана шулай эшләргә, уларҙы йәлеп итә белергә кәрәк, тип өлгө итеп тә ҡуя хатта. Йә булмаһа, коллективта бергә эшләгәндәр араһында бер-ике башҡорт һәм татар милләтенән дә хеҙмәткәрҙәр бар, улар менән дә үҙебеҙсә аралашабыҙ. Хәтерләһәгеҙ, элегерәк был мөмкин түгел ине. Йыйылыштарҙа, мәҫәлән, 50-ләп кеше ҡатнашып, шунын береһе генә сит милләттән булһа ла сығыштар вата-емерә русса һөйләнә ине. Һәр хәлдә, бер кем дә беҙгә аралашыуҙы тыймаһа ла, башҡа милләт кешеләре араһында үҙ телендә һөйләшеү насар тон һаналды. Хәҙер ундай ҡараш юҡ, бәхеткә күрә. Беҙ үҙебеҙҙе иркенерәк тойғандайбыҙ. Был йәһәттән беҙгә, ахыры, Кавказ төбәктәренән килгән мигранттар өлгө күрһәтә. Әйткәндәй, улар ҙа бар беҙҙең арала. Бер кемдән уңайһыҙланып тормай, ҡулдарын болғай-болғай, ҡысҡырып үҙ телдәрендә һөйләшеүҙәрен беләләр. Уларҙы һеҙ Өфө урамдарында, транспортта, баҙарҙарҙа үҙегеҙ ҙә күрәһегеҙ - бер ниндәй оялыу, әҙәп һаҡлау тигән нәмә юҡ уларҙа. Ә беҙгә үҙ илебеҙҙә үҙ телебеҙҙә аралашыуҙан ниңә уңайһыҙланырға һуң? Халыҡ шағиры әйтмешләй, "бер телдән дә телем кәм түгел!"

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЗАМАН БАШҠОРТО

# СИТ ТӨБӘКТӘ, БЕР ВӘКИЛЕНӘ ҠАРАП,

## тотош милләт тураһында фекер йөрөтәләр...

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - МТС бәйләнеш операторының Төркмәнстан компанияһында маркетинг буйынса директор Рәмил Азамат улы БИКҠУЖИН. Ул үҙенде һәм үҙең етәкселек иткән коллективтағы хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә һөҙөмтәле йәлеп итеү серҙәре, һөнәри оҫталыкты камиллаштырыуҙың иң ҡулайлы ысулдары, эште дөрөҫ ойоштороу һәм шәхесте төрлө яҡлап үҫтереү ҡанундары тураһында бәйән итәсәк. Һәм әңгәмә аҙағында Башҡортостанға ҡайтыуҙың әлеге ваҡыттағы уңайлы һәм уңайһыҙ яҡтары тураһында ла үҙ фекерен белдерер.**



**Рәмил, әңгәмәбеҙ башында үҙегеҙҙең тамырҙарығыҙ, тыуған яғығыҙ, һеҙгә шәхес булараҡ формалашырға ярҙам иткән мөхитегеҙ, бәләкәй Ватанығыҙ тураһында һөйләп үтһәгеҙсе...**

- Мин Өфө ҡалаһында тыуғанмын. Шулай ҙа бала сағымдың байтаҡ йылдары атайым менән әсәйемдең тыуған яғында - Әбйәлилдә үтте. Әсәйем, географ дипломлы белгес, юғары уҡыу йортонан һуң юллама менән Әбйәлил районы Северный ҡасабаһына эшкә ебәрелә, шуға ла беҙ башта ошо ауылда йәшәнек, мин 1-9 синыфтарҙа ошо ауыл мәктәбендә уҡыным. Северный - Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Волга буйынан күсерелгән немец ғаиләләренән барлыҡҡа килгән ҡасаба ул. Беҙгә бында немец халҡы, уларҙың балалары менән аралашып йәшәргә насип булды. Был милләт вәкилдәре үҙҙәренең тырышлығы, эшсәнлеге, һәр эшкә маһир булыуҙары менән хәтеремдә ҡалған.

9-сы синыфтан һуң уҡыуымды Өфөләге Республика иҡтисад лицей-интернатында дауам иттем. Унда уҡыған йылдарҙа Өфө дәүләт нефть техник университеты белгестәре алып барған "Маркетинг" факультативында шөғөлләндем һәм был өлкә менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланым. Артабан ошо йүнәлеш буйынса уҡыуымды дауам итергә ҡарар ҡылдым һәм Өфө дәүләт авиация техник университетының иҡтисад факультеты маркетинг бүлегенә уҡырға индем. Күп кенә һабаҡташтарым һымаҡ, уҡыу менән эште бер юлы алып барҙым. "Билайн"дың Башҡортостандағы филиалында ике йыл рәттән практика үттем. Тәүге мәлдә еңелерәк эш ҡушалар ине, яйлап бурыстарым тосланды: тарифтар пландарын төҙөүгә, иҫәп-хисап алып барыуға йәлеп ителә башланым. Күп тә үтмәй, компанияның беҙҙең төбәктәге корпоратив сайтын алып барыуҙы ла ышанып тапшырҙылар. Практика ваҡыты үтһә лә, 4-се курсҡа еткәнемсә, ошо компанияла эшләүҙе дауам иттем. 4-5 курстарҙа иһә, бухгалтер программалары менән һатыу иткән бер компанияла эшләнем. Университетты тамамлап, ҡулға диплом алғас, "Билайн"ға эшкә саҡырылдым. Шул ваҡыттан алып, телекоммуникациялар өлкәһенән киткәнем юҡ. 2008 йылдан МТС-та эшләйем. Әлеге ваҡытта ғаиләм менән Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта "МТС-Төркмәнстан" компанияһының маркетинг буйынса директоры вазифаһын башҡарам.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

✓ *Күрәһең, Башҡортостан мәктәптәрендә тотош туған тел уҡытыу системаһында үҙгәрештәр кәрәк. Килеш төрҙәрен, һүҙ төркөмдәрен ятлатыуға түгел, ә телмәр үҫтереүгә йүнәлтелһен ине дәрестәр.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЮҒАРЫЛЫҠ ШУЛАЙ ЯУЛАНА

***Миләүшә МОРТАЗИНА, Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Һәр эштә талантлылыҡ, юғарылыҡҡа ынтылыу, шул уҡ ваҡытта сама белеү мөһим. Хеҙмәтең тәү сиратта халыҡ өсөн файҙалы, ҡыҙыҡлы булырға тейеш. Бөгөн, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, кешеләр бәләкәй генә уңышын да "ат башындай" итеп күрһәтергә әүәҫләнеп алды. Һәр аҙымың хаҡында яр һалып белдереп йөрөһәң, юғары бейеклек яулап булмай ул. Туған телде үҫтереү мәсьәләһенә килгәндә лә, ул халыҡ өсөн хеҙмәт итеүҙең бер өлгөһө. Был бурысты мауыҡтырғыс итеп, бөтөн талантыңды йәлләмәй һалып атҡарыу зарур. Рәсмилектән, күңелһеҙлектән, бер төрлөлөктән ҡасырға кәрәк. Шул ваҡытта, һис шикһеҙ, һөҙөмтә лә буласаҡ. Башҡорт теле шул ҡәҙәре йомшаҡ бит ул. Һуҙынҡы өндәре киң, моңло. Әйтерһең, тик йыр өсөн генә яратылған! Ошонан сығып, мин башҡа милләт студенттарына күнекмәләр үткәргәндә ҡабатлау өсөн башҡорт һүҙҙәрен бирә торғайным. Был уларға тауышын асыуҙа, моңон сығарыуҙа ярҙам итте. Мәҫәлән, "әсәй" һүҙен әйтегеҙ әле. Яңаҡ йомшарып китә бит! Ғөмүмән, барлыҡ эшғәмәлдәр ысын күңелдән, ҙур теләк менән башҡарылһын ине. Юғиһә рәсмилек арҡаһында хатта яҡшы башланғыстар ҙа юҡҡа сығып ҡуя бит. Ә ихласлыҡты тойоу һәр әҙәм балаһына кинәнес бирә, күңелендә ышаныс уята.

Бөгөнгө йәмғиәттә байлыҡ артынан ҡыуыу күп кешенең тормош маҡсатына әйләнеп китте. Бындай ҡомһоҙлоҡ үҙ юлыңды таба алмауҙан, күңелдең бөтөн булмауынан барлыҡҡа килә. Ә тәбиғәттән бирелгән һәләтен үҫтергән, унан кинәнес алып, халыҡҡа кәрәклеген тойоп йәшәгән кеше рухи ҡиммәттәрҙе һәр нәмәнән өҫтөн ҡуя. Мин уҡыусыларыма тап шундай тәрбиә бирергә тырыштым. Һәр кешегә ниндәйҙер талант һалына. Уны үҫтерәһең икән, күңел дә яҡты була.

**Дилбәр ТӘЛҒӘТОВА**
**яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Үҙ телеңдә һөйләшергә һиңә нимә ҡамасаулай?

**(Башы 1-се биттә).**

***Айһылыу МОСТАФИНА, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты:*** Бер кем дә ҡамасауламай, ләкин ҡалала беҙ шундай мөхиттә йәшәргә мәжбүрбеҙ: гел үҙ телеңдә генә аралашыу мөмкин түгел, үкенескә. Мәҫәлән, мин физика-математика факультетында уҡыйым, беҙҙең курста башҡорттар юҡ, тип әйтерлек, ике ҡыҙ менән бер егетте генә беләм. Ҡалғандары төрлө милләттән: рустар, руслашҡан татарҙар, сыуаш, мариҙар һ.б. Шуға күрә лә, нимә ҡамасаулай, тигән һорауға "Ҡала мөхите", тип яуаплар инем. Икенсе бер мәсьәлә лә бар: йыш ҡына үҙебеҙ ҙә үҙебеҙгә ҡамасаулайбыҙ. Йәғни дуҫтар менән осрашҡанда, урамда, транспортта, хатта йыш ҡына өйҙә лә, күнегелгәнсә, русса һөйләшә башлауыңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Күрәһең, шулай еңелерәк, тип уйлайбыҙ. Был айырыуса мәктәптә уҡыған йылдарҙан тороп ҡалған ғәҙәттер. Башҡорт мәктәбендә уҡыһаҡ та, унда үҙ телебеҙҙә аралашыу ҡәтғи ҡуйылманы, класыбыҙ ғына түгел, бөтөн мәктәп русса һөйләшә, ә башҡортсаға мәктәп директоры йә башҡорт теле уҡытыусыһы менән аралашҡанда ғына күсеп китә инек, унда ла ыҡ-мыҡ итеп... Ә хәҙер миндә үҙ телемдә аралашыу теләге, эске бер ихтыяж барлыҡҡа килде, быға бик шатмын һәм мөмкин тиклем башҡортса күберәк һөйләшергә тырышам. Өйҙә, милләттәш дуҫтарым, туғандарым, таныштарым менән, шулай уҡ интернетта ла хатта үҙ телемдә аралашыуға өҫтөнлөк бирә башланым. Шулай ҙа әлегә ҡыйынлыҡтар бар, сөнки барыбер телмәргә русса йә сит телдән һүҙҙәр ҡыҫтырып ебәрергә тура килә. Юғиһә, шул һүҙҙәрҙең башҡортса тәржемәһен уйлап, оҙаҡ һуҙылып тороп булмай бит кеше менән һөйләшкәндә. Балалар баҡсаһына башҡорт төркөмөнә йөрөгәндә һәм өйҙә элек туған телемдә апаруҡ яҡшы һөйләшә торғайным, проблемалар тап ана шул мәктәп йылдарында башланды ла инде. Мин бында башҡорт теле уҡытыусыһын ғәйепләргә йыйынмайым. Күрәһең, Башҡортостан мәктәптәрендә тотош туған тел уҡытыу системаһында үҙгәрештәр кәрәк. Килеш төрҙәрен, һүҙ төркөмдәрен ятлатып түгел, ә телмәр үҫтереүгә йүнәлтелһен ине дәрестәр. Йәнле аралашыу, уйын формалары, диалогтар ҡороп төҙөлгән дәрестәрҙең файҙаһы күберәк буласаҡ, минеңсә.

***Йәмил АҠБУЛАТОВ, пенсионер, Ҡырмыҫҡалы районы Шәрипҡол ауылы:*** Беҙ, ауыл халҡы, был йәһәттән бик бәхетлебеҙ икән: үҙ телебеҙҙә һөйләшеүгә беҙгә бер кем, бер нәмә лә ҡамасауламай. Тик әллә ниҙә бер йомош-юл менән район үҙәгенә йә берәй ҡалаға юл төшкәндә генә русса көсөргәнергә тура килә - шуныһы. Тик аптырап ҡалмайбыҙ былай, хәлдән сыға беләбеҙ: уҡыу бер аҙ әләккән быуын да әле беҙ. Тик бына үҙәк район, республика клиник больницаларында ҡыйынғараҡ тура килә. Бер заман медиктарға башҡорт телен өйрәтә лә башлағайнылар һымаҡ хәтерләйем, хәҙер ундай нәмә һиҙелмәй. Һәр хәлдә, табиптар үҙҙәре йәшәгән, эшләгән төбәктәге телдәрҙе икмәк-тоҙлоҡ ҡына булһа ла белергә тейештер, тигән фекерҙәмен. Ауылда башҡортса һөйләшәбеҙ, тинем дә ул, был шулай ҙа күбеһенсә өлкән быуын вәкилдәренә ҡағыла. Ә бына йәштәр, балаларҙың йыш ҡына русса аралашҡанын ишетеп, аптырап китәм. Баш ҡалаға яҡын булыуыбыҙ ҙа сағыла бында, сөнки ял көндәре етһә, Өфөлә, Стәрлетамаҡта уҡып, эшләп йөрөүсе йәштәр ҡайтып тула. Ауылдағы телмәр мөхитен ана шулар боҙа ла инде. Ауыл балалары иһә, уларҙан күрмәксе, үҙ телен һанламай башлай, хатта руссалап һүгенгәндәрен дә ишеткеләйем. Бындай хәлгә юл ҡуйырға ярамай. Мин был хаҡта мәктәптә булып торған осрашыуҙарҙа һәр саҡ әйтә киләм. Үҙ телеңә етәме һуң инде! Балалыҡ, йәшлектәренә барып әле бик аңламаһалар ҙа, үҫә килә, айырыуса өлкәнәйә килә кешене барыбер тыуған еренә, туған теленә тарта, йәғни асылына ҡайта бит ул.

**Фәүзиә**
**МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# БАХЫРҒА ТҮГЕЛ, БАТЫРҒА ТАЯН

**? Ни өсөн ҡайһы берәүҙәр ауыҙынан: "Беҙ бөлдөк, беҙ элекке башҡорт түгел. Беҙҙең башҡорт заманға яраҡлаша алманы инде", - тигән күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән һүҙҙәр ишетелә? "Булыр илдең балаһы бер-береһен батыр тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһен бахыр тиер", - тигән әйтем телгә килеп, хәүефләнеп тә ҡуйыла. Ошо мәсьәләне гәзит уҡыусыларыбыҙ менән уртаҡлашыуҙы дауам итәбеҙ:**

***Фәнис ӘЛМӨХӘМӘТОВ, шәхси эшҡыуар:*** Миңә лә ишетергә тура килгеләй бындай фекерҙәрҙе. Әммә мин ундай ҡарашҡа һәр ваҡыт ҡаршы сығам һәм үҙ фекеремде иҫбатларға тырышам. Дәлилдәр килтерәм. "Бахыр булған халыҡ күптән инде ер йөҙөнән юҡ ителер ине. Бахырлыҡ ҡанында булған халыҡ оҙаҡ йәшәй алмай. Ә бахырлыҡ ҡанында булмағас, бөгөнгө заман башҡорттарында ул ҡайҙан булһын?" - тип уйлайым да, ундай фекер килеп сығыуының төрлө сәбәптәренә төшөнөргә тырышам.

Төрлө милләт кешеләре менән бергә эшләргә һәм йәшәргә тура килә. Мин башҡорттарҙың бик күп һәйбәт сифаттарын һанап китә алам. Башҡорттар хеҙмәт ярата һәм бер саҡта ла ваҡыты менән иҫәпләшмәй. Уға эштең һөҙөмтәһе кәрәк. Шуның өсөн дә совет замановындағы 9-ҙан 6-ға тиклем тигән ҡалыпҡа ауыр яраҡлашҡандыр улар. Үҙ эшен баштан алып аҙағына тиклем үҙ ҡулдары менән башҡарырға өйрәнгән башҡорт заводтарҙа фәҡәт эш хаҡы өсөн генә машинаның йәки сәғәттең бер генә детален эшләп тороу менән ҡәнәғәтләнә алмағандыр. Быға ла ауыр яраҡлашҡандыр. Күңел төшөнкөлөгө кисергәндер.

Башҡорт үҙен күрһәтергә түгел, ә иң элек эшен күрһәтергә тырыша. Ул самаһыҙ байлыҡҡа ҡарағанда, күңел тыныслығын артығыраҡ күрә, рухи байлыҡты өҫтөнөрәк ҡуя. Мин үҙем дә, мәҫәлән, мөмкинлегем булһа ла, мал ишәйтергә тырышмайым, ә ғаиләмә белем алырға, рухи йәһәттән байырға шарттар булдырырлыҡ ҡына матди байлыҡ табыу сараһын күрәм. Башҡарған эштәрем хаҡында уйлағанда ла алған эш хаҡтарымдың күләме түгел, ә эшемдән ҡәнәғәт ҡалған кешеләрҙең ҡыуаныуы иҫтә ҡалған.

Заманға оҙаҡ яраҡлашыу ҙа ялҡаулыҡтан түгел. Ә аҡрын уйлап, төплө эшләй, халыҡ әйтмешләй, еренә еткереп башҡарыу сифатынан киләлер. Шуның өсөн дә башҡорттоң эше аҡрын барған һымаҡ булһа ла, төплө килеп сыға. Ундай сифаттары булған халыҡты бахырҙар рәтенә индермәҫ инем. "Мин бахыр, халҡым бахыр", тип йөрөгәнсе, тот та эш башла. Бөгөнгө заманда холоҡ-фиғелеңә тотош тап килгән эштәр башларға мөмкинлек тыуҙы. Тик хәрәкәт ит, зиһенеңде эшкә ҡуш. Тик тороу ялҡаулыҡҡа килтерә. Юғары маҡсатлы, эшенән ҡәнәғәт кеше бер ҡасан да үҙен дә, милләтен дә кәмһетмәҫ. Ә үҙ милләтен кәмһеткән кеше башҡаны ла ҙурламай.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан халҡы төбәк дәүләт хеҙмәттәре порталында пособие һәм субсидияларҙы электрон төрҙә юллай ала. Әлеге ваҡытта порталда социаль ярҙам сараларын биреү буйынса алты дәүләт хеҙмәтен электрон төрҙә алырға мөмкин. Һүҙ торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә субсидиялар, аҙ тәьмин ителгән граждандарҙың айырым категорияларына социаль пособие, ваҡытлыса эшкә һәләтһеҙлек буйынса һәм әсәлеккә бәйле мотлаҡ социаль страховкаға эйә булмаған граждандарға баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособие тураһында бара.

✓Өфөлә Жәлил Кейекбаев исемендәге VI республика туған телдәр фестивале уҙҙы. Уны Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы һәм ЮНЕСКО-ның ассоциациялы мәктәбе - Өфөнөң 39-сы гимназияһы менән берлектә Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты ойошторҙо. Фестиваль 1999 йылда ЮНЕСКО-ның Генераль конференцияһы тарафынан ойошторолоп, Халыҡ-ара туған тел көнөнә арналды. Быйыл яңы тема тәҡдим ителде - "Халҡымдың әкиәт донъяһы". Сарала ҡатнашыусылар төрлө телдәрҙә донъя халыҡтарының әкиәттәрен сәхнәләштерҙе.

✓Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының концерт залында Халыҡ-ара Туған тел көнөнә арналған республика байрамы үтте. Йыр һәм бейеү номерҙары менән Өфөнөң милли йәкшәмбе мәктәптәре коллективтары, Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институты студенттары сығыш яһаны.

✓2017 йылдың ғинуарында икенсел автомобиль баҙарын тикшереү нигеҙендә "Автостат Инфо" аналитиктары төбәк баҙарҙары рейтингын төҙөгән. Рейтингта Мәскәү әүәлгесә беренсе урынды биләй. Илдең баш ҡалаһындағы тотонолған автомобилдәр баҙарында иң талап ителгән модель - Ford Focus. Башҡортостан тәүге ун төбәк исемлегендә етенсе урынды биләй - 8,8 мең автомобиль һатылған. Иң талап ителгән модель Lada 2114. Бер айҙа республикала шундай 461 автомобиль һатылған.

*✓ МЧС мартта көтөләсәк ҡар бурандары хаҡында иҫкәртеүҙәр бирә башланы. Шулай кәрәктер ҙә, юғиһә, "Аҡман-тоҡман" риүәйәтендәге кеүек, март айында уйһыҙ-ниһеҙ юлға сығып, буран тотҡонона әйләнеүселәр булып тора бит.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# АҠМАН-ТОҠМАН ЯҘ КИЛТЕРЕР

**Буранайҙың 1-се көнө, исеменә ҡарамай, яҙҙың тәүге көнө тип алына ҡайһы бер календарҙарҙа. Хәйер, быны тәкрарлап тороу кәрәкме икән һуң: март башланды - яҙ килде бит беҙҙең өсөн! Тик бына һәр тыуған миҙгел үҙенең ниндәй ҙә булһа холҡон күрһәтеп аптырата хәҙер.**

Халҡыбыҙ боронғо һынамыштары буйынса йылдан нимә көтөрөн алдан белгән, ә хәҙер тәбиғәттең көйө, экологик тәртибе тамам боҙолдо: ул фараз һәм юрауҙарынды бар тип тә белмәй. Әйтерһең дә, экологияға ғәфү итмәҫлек кимәлдә битараф, һаҡһыҙ булғаны өсөн ул кешелектән үс ала... Шулай ҙа яҙҙы ҡаршыларға үтә ҡабаланмай тороу хәйерлерәктер, сөнки халыҡ әйтмешләй, аҡман-тоҡман булмайынса, ауыҙ тултырып, яҙ килә, тип әйтеп булмай әле. Интернет материалдарҙа әле үк МЧС мартта Көньяҡ Урал буйынса көтөләсәк ҡар бурандары, көндөң көйһөҙләнеүе, көслө ел иҫәсәге хаҡында иҫкәртеүҙәр бирә башланы. Шулай кәрәктер ҙә, юғиһә, "Аҡман-тоҡман" риүәйәтендәге кеүек, март айында уйһыҙ-ниһеҙ юлға сығып, буран тотҡонона әйләнеүселәр, хатта туңып үлеүселәр ҙә булып тора бит. **1 март** йәнә лә донъя күләмендә халыҡ хәүефһеҙлеге һағында тороусы Граждандар оборонаһы көнө булараҡ юҡҡа билдәләнмәйҙер шуға ла. Етмәһә, быйыл да көслө ташҡындар көтөлә, тип фаразлайҙар...

Март баштарында **(3)** Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт көнөн билдәләп китеү ҡарала, тик бөгөн ундай әҙәм аяҡ баҫмаған төпкөл, аулаҡ, боронғо урындар ҡалдымы икән беҙҙә? Себер, Саян тайгаларына, Агафья Лыкова янына ғына барып күрмәһәң уны - ҡырағай тәбиғәтте?

Нисек кенә булмаһын, көн яманы китер, тиҙәр. Ҡышҡы һыуыҡтар ҙа, аҡман-тоҡманы ла бәлә-ҡазаһыҙ үтеп китһен, әйҙә, яҙ яҙлығын итһен әле - ҡар боҙҙары ireһен, гөрләүектәр шаулаһын, умырзая күҙҙәрен асып, ҡояшҡа йылмайһын: календарҙың сираттағы көндәре ғүмер буйы яҙғы нурҙарҙан илһамланып, әҫәрҙәр ижад итеүсе Яҙыусылар көнө **(4)**, ә инде ай ахырындараҡ - **(21)** Бөтөн донъя шиғриәт көнө лә бит!

Әйтергә лә түгел, беҙ, ҡатын-ҡыҙ, ошо март айын күбеһенсә фәҡәт шул бер дата - **8 март** өсөн көтәбеҙҙер, ахыры, тием. Алдан күңелде йылытып, уға ҡояш нуры өҫтәп, ҡыуаныҫҡа ымһындырып тик тора бит, юғиһә. Әллә, тим, тормошобоҙҙағы ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт, бер төрлөлөк ялҡытып китәме? Икенсе яҡтан, тормошонда һәр көн танһыҡ байрам кеүек яҡты итергә теләйһең икән - ул үҙеңдең ҡулыңда, тиҙәр бит психологтар. Ризалашмай ҙа булмай: байрам көтөп кенә йәшәргә түгел, ә һәр көнөңдө байрам һымаҡ итеп йәшәргә ынтылырға кәрәктер.



Тормош сифатын яҡшыртыуға Бөтөн донъя ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау көнө **(15)** лә үҙ өлөшөн индермәксе, сөнки беҙ даими рәүештә тауар сифатын йә хеҙмәтләндереү кимәлен яҡшыртыу өсөн ҡулланыусы хоҡуҡтарын яҡшы белергә тейешбеҙ.

Мартта шулай уҡ әллә ни байрам рухы бәреп тормаһа ла, кәрәкле, тормошобоҙ күп йәһәттән уларға бәйле хеҙмәттәр: Архивтар **(10)**, Наркотиктарҙы контролдә тотоу органдары **(11)**, Һаҡ **(11)**, Геодезия һәм картография **(12)**, Енәйәт башҡарыу системаһы **(13)**, Иҡтисади хәүефһеҙлек **(16)**, Һалым полицияһы **(18)** хеҙмәткәрҙәре һөнәри байрамдарын билдәләй. Эштәрендә уңыштар юлдаш булһын, тип теләйек уларға. Шул көндәр араһында күпселек календарҙарҙа ла булмаған бер дата - Милләттәр берлеге көнө **(13)** күҙгә салынып ҡалды. Донъябыҙ тотҡаһы, уның именлеген тәьмин итеүсе бик мөһим көн тип иҫәпләнәлер, тигән уйҙамы һеҙ ҙә, йәмәғәт? Дөрөҫ юлдаһығыҙ, улайһа! Тағы бер көн оялып, уңайһыҙланып ҡына ҡарап торасы! Шулай уҡ күпселек календарҙа юҡ, бахырың, ниңә ситнәтәләр икән уны? Беләһегеҙме ниндәй көн ул - Йоҡо көнө **(17)**. Йоҡларға яратабыҙ инде былай, һүҙ ҙә юҡ, айырыуса йәштәр, үҫмер балалар. Ә бына сабыйҙар менән ҡарттарҙы йоҡо алмай - ғәжәп! Юғиһә, сама белеп (ғалимдар 8 сәғәт тейеш, ти) йоҡлау - ул сәләмәтлек нигеҙе икәнен һәр кем белергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта артыҡ йоҡлауҙың да файҙаға түгеллеген ишетеп ҡуйығыҙ: 7-8 сәғәт. Яҡшы кәйеф, иммунитетты күтәреү һәм психик хәүефһеҙлек йәһәтенән шул да етә, тиҙәр.

Шулай итеп, буранайҙың 20-һенә лә килеп еттек. Хәҙер инде аҡман-тоҡмандан ҡурҡмаһаҡ та булалыр, шәйт. Тап ошо көндө Ҡыш бабай үҙенең еңелеүен танып, хоҡуҡтарын һала һәм идара эшен Яҙһылыуға тапшыра, имеш. Икенсе төрлө әйткәндә, көн менән төндөң яҙғы тигеҙләнешкә, көйләнешкә тап килеүе был мәл. Бына ошондай яңырыш, яҡтырыш мәлдәрендә һөйөклө Башҡортостаныбыҙҙың да тыуған көнө **(20)** - Рәсәй Эшсе-Крәҫтиән хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡортостан Совет Автономияһы тураһында Килешеү төҙөлгән. Символик мәғәнәле мәлдәрҙең береһендә Йыһан нуры яҡтылығын һибеп, фатихаһын биреп торған был ғәмәлгә, иншалла.

Наурыз көнөнән һуң **(21)** быйылғы Экология йылында үҙенең мөһимлеген тағы бер ҡат кешелек аңына еткерергә ынтылғандай, Һыу көнө - Бөтөн донъя һыу ресурстары көнө **(22)** билдәләнә. Белгестәр әле үк иҫкәртә килә: киләсәктә һуғыш була ҡалһа, ул нефть-газ өсөн дә, икмәк өсөн дә түгел, ә эсәр һыу өсөн булыуы ихтимал, тип. Киләсәк донъяның тағы бер афәте баш күтәрмәһен, тиһәк, Бөтөн донъя туберкулезға ҡаршы көрәш көнөндә **(24)** генә түгел, ә һәр ваҡыт һәм мөмкин булған-булмаған әмәлдәр менән ошо сиргә ҡаршы тора белергә, һәр кемгә үҙен, яҡындарын һаҡлау сараһын күрергә әҙер булырға кәрәк. Ай ахыры матур көндәр менән тамамланыр, тип ышанайыҡ, сөнки тап шул мәлдәрҙә Рәсәй мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре **(25)** һәм Бөтөн донъя театр **(27)** көндәре тормошобоҙҙо байрам итерҙәй, уға илһам өҫтәрҙәй көскә эйә була алыр, моғайын. Һәм, ниһайәт, һүҙебеҙҙе оптимистик рухта тамамларға тағы бер ишара: Советтарҙың V Бөтөн башҡорт съезы тарафынан Башҡорт АССР-ының I Конституцияһы раҫланһа, бынан 25 йыл элек Федератив Килешеүгә һәм шул Килешеүгә Башҡортостан Республикаһынан Ҡушымтаға ҡул ҡуйыла **(31)**.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**18 -** Дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, БР Ауыл хужалығы тауар етештереүселәр союзы рәйесе, иҡтисад фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре **Зифҡәт Сәйетғәлиевҡа** - 70 йәш (1947).

**23 -** Педагог, йәмәғәт эшмәкәре, "Аҡтамыр" Башҡортостан халыҡ мәғарифына булышлыҡ итеү үҙәге рәйесе **Мөхәмәтғәле Исҡужиндың** тыуыуына - 90 йыл (1927-2000).

**28 -** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры йырсыһы, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Раил Кучуковҡа** - 65 йәш (1952).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ*

## ҠЫҘЫҠЛЫБЫҘ... милли биҙәк булараҡ

**Был баҫманы мин сыға башлаған көндәренән алып уҡыйым һәм "Башҡортостан" дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһындағы коллегаларымдың да ҡулында уны йыш күрәм.**

"Киске Өфө" сәйәси йәки мәғлүмәти баҫма ғына түгел. Бында бөтөн темалар ҙа яҡтыртыла. Һәм улар милли рухҡа, беҙҙең менталитет сиктәрендәге аңлатмаларға төрөп бирелә. Халыҡсанлығы менән алдыра ул. Уны гәзит итеп кенә түгел, ә бер журнал йәки хатта китап итеп ҡабул итәһең. Сөнки унда яҙылғандар - мәңгелек хәҡиҡәт. Ниндәйҙер мәғлүмәти гәзиттәрҙе ҡапыл-ҡапыл асып ҡарап, күҙ йүгертеп кенә алһаң, "Киске Өфө"нө уҡыуҙы иһә ял итеү ваҡытына, киске тыныс мәлгә ҡалдыраһың. Сөнки уны "ҡарап сығып" ҡына булмаҫын беләһең.

Гәзиттең авторҙар менән әүҙем эшләүе оҡшай. Был үҙе үк баҫманың уҡымлы һәм уның ижадында уҡыусыларҙың да ҡатнашырға теләүен күрһәтә. Уйлап ҡараһаң, бөгөн редакциялар уҡыусыларынан әллә ни күп хат та алмай бит. Ә "Киске Өфө"гә яҙалар, күрәһең, гәзит биттәрендә әленән-әле бик ҡыҙыҡ авторҙар менән танышаһың. Фәүзиә Яхина, Хәлил Һөйөндөков, Лена Абдрахманова, Эльза Мөхәмәҙиева, Азат Ярмуллин Шәһүрә Әхмәҙиева, Әнүәрә Монасипова, Әғләм Шәрипов - һәр береһенең яҙғаны хәтерҙә ҡала.

Рубрикаларҙың төрлөлөгө, уларҙың да һүҙ уйнатыуға ҡоролоуы, фәһемле, нигеҙле, эстәлекле булыуы оҡшай. "Әсәйем лөғәте", "Аҡыл-ҡаҙна", "Булған хәлдәр", "Килешмәйем", "Бәхәс ҡорам" кеүек рубрикаларҙағы материалдарҙы һәм диалогтарҙы ҡалдырмай уҡыйым. Гәзиттең уҡымлы һәм фәһемле булыуын тәьмин итеүсе, уның милли баҫма булараҡ популярлығын ҡайғыртыусы редакцияға хеҙмәттәштәрем һәм үҙ исемемдән уңыштар теләйем. Шуны онотмайыҡ: беҙ милли биҙәк булараҡ ҡыҙыҡлыбыҙ, сағыубыҙ һәм ҡабатланмаҫбыҙ. Шулай булайыҡ та.

**Флүрә МУРЗИНА,**
**"Башҡортостан" ДТРК-һы дикторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Хөкүмәте йәйәүлене үткәрмәгән водителдәр өсөн штрафтарҙы арттырыу хаҡында закон проектын хупланы. Проект Рәсәйҙең Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына төҙәтмәләр менән Дәүләт Думаһына индерелгән. Әле йәйәүлегә юл бирмәгән водителгә 1500 һум штраф янай. Был - штрафтың минималь күләме, иң күбе 2500 һум булыр тип күҙаллана.

✓Өфөлә композитор Салауат Низаметдиновтың тыуған көнөндә уның "Ай тотолған төндә" операһы күрһәтелә - 3 мартта күренекле башҡорт композиторына 60 йәш тулыр ине. Республикала композиторҙың тыуыуына 60 йыл тулыуға ҡарата башҡа саралар ҙа ойоштоорола. Уның исемен йөрөткән Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжында музей асылыуы әһәмиәтле ваҡиғаларҙың береһе булмаҡсы. Шунда уҡ 10-11 мартта Салауат Низаметдинов исемендәге республика йәш йырсылар конкурсы уҙа.

✓Өфөләге Конгресс-холл эргәһендәге амфитеатрҙа open air уҙғарыу датаһы билдәле булды. "Берҙәмлек-Содружество" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестиваленең асыҡ һауалағы гала-концерты "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестиваленә старт бирәсәк. Сара 12 июнгә, Рәсәй һәм Өфө ҡалаһы көнөнә күҙалланған. Билдәләнеүенсә, быйыл традицион "Берҙәмлек-Содружество" фестивале республиканың төньяҡ-көнсығышында - Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы һәм Салауат райондарында үтәсәк.

✓Республика дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре Өфөлә, шулай уҡ федераль һәм республика автомобиль юлдарында ярҙам күрһәтергә әҙер. Юлдарҙа ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуғанда ведомство хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәт итергә йәки (347) 237-02-02, 235-84-02, 233-27-31, 02 телефондары буйынса дежур бүлеккә шылтыратыу зарур.

✓Боҙҙа мотоуҙыш буйынса Рәсәй команда беренселегенең алтын һәм көмөш миҙалдарын Башҡортостан уҙышсылары яуланы. Стәрлетамаҡтың "Каустик" мотоклубы командаһы еңеүсе булды. Был команда өсөн Дмитрий Соляянников, Никита Тарасов һәм Вадим Свинухов сығыш яһаны. Ике көн эсендә стәрлетамаҡтар 43 мәрәй йыйҙы һәм Өфөнөң Ғ. Ҡадиров исемендәге Техник спорт төрҙәре үҙәген биш мәрәйгә уҙып китте.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘҮГЕ БАЛАҒА - АҠСА!

**Республикалағы демографик хәл буйынса кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тәүге бала өсөн бер тапҡыр аҡсалата пособие түләнәсәге тураһында хәбәр иткәйне. "Яҡын араларҙа мин ошо йылдан алып тәүге балаһы тыуған йәш ғаиләләргә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу маҡсаттарында 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр түләнелә торған пособие хаҡында указға ҡул ҡуясаҡмын", - тине ул.**

Башҡортостан Хөкүмәте етәксеһе урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкләгән махсус эш төркөмөнә демография проблемалары менән шөғөлләнеү бурысы йөкмәтелде. Төркөм составында министрлыҡтар чиновниктары, ғалим-социологтар бар. 2017 йылдың 1 мартына тиклем уларға республикала тыуымды арттырыу буйынса план проектын эшләргә ҡушылды. Улар шулай уҡ субсидия алыу тәртибен дә билдәләйәсәк, тип фараз ителә.

Ошо тәңгәлдә шундай һорау тыуыуы ихтимал: тыуым, әлбиттә, кәмене, ләкин мәсьәлә ни кимәлдә етди тора һуң? Рөстәм Хәмитовтың һүҙҙәре буйынса, 2016 йылда Башҡортостанда 55 708 бала тыуған, ә бына 2015 йылда тыуыусылар һаны күберәк - 59 028. Проценттарҙа был минус 5,5 процент тәшкил итә һәм дөйөм ил буйынса (-2,6%) алғанда байтаҡҡа күберәк.

"Буласаҡ ата-әсәләр һаны кәмегәндән-кәмей. Бала табыуҙы кисектерә килгән ғаиләләр һаны арта бара. Тәүге балаһын табыусыларҙың уртаса йәше республикала 25-тән 27-гә тиклем күтәрелде. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, айырыуса ауыл ерҙәрендә эш хөрт", - тип күңелһеҙ һығымта яһаны республика Башлығы. Өфө, Күмертау ҡалаларында, Баймаҡ, Ейәнсура, Стәрлетамаҡ райондарында тыуым кәмеленең бер аҙ артыуы күҙәтелһә лә, Йәрмәкәй, Федоровка, Борай һәм Краснокама райондары буйынса күрһәткестәр ҡыуандырмай икәне билдәләнде. Нисек кенә булмаһын, дәүләт хәстәрлеге, йәғни тәүге балаға тәғәйенләнәсәк 300 мең һумлыҡ пособие тураһындағы хәбәр йәштәрҙе уйландырмай ҡалмаҫ, тип ышанайыҡ.

# КИСЕКТЕРЕЛДЕ!

**РФ Дәүләт Думаһы бушлай торлаҡ хосусилаштырыу ваҡытын сикләмәү өсөн тауыш бирҙе.**

Бынан алдараҡ депутаттар бушлай хосусилаштырыу мәсьәләһен бер тапҡыр кисектергәйне инде. Быйыл иһә уның ваҡытын мартҡа ла ҡалдырып ҡаранылар, ләкин депутаттар исемено төбәктәрҙән был ғәмәлде артабан оҙайтыуҙы һораған хаттар яуа башланы. Әмәлгә ҡалғандай, Владимир Путин рәсәйҙәрҙең тормошон бюрократия торғонлоғонан еңеләштереүҙе талап иткәйне. Ул чиновниктарҙы фатир хосусилаштырыу эшендәге ҡатмарлыҡтар өсөн ныҡ ҡына тәнҡитләгәйне. Һеҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне. Хөкүмәт торлаҡ хосусилаштырыуҙы ниндәйҙер ваҡытҡа тиклем сикләмәҫкә ҡарар итте, ә депутаттарға шул ҡарарҙы яҡлап, тауыш бирергә генә ҡалды. Сикләүһеҙ хосусилаштырыу тураһында закон ошо көндәрҙә үҙ көсөнә инә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҒАИЛӘ ҠОРОУ УЙЫН ТҮГЕЛ ДӘ УЛ...



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты ултырышында депутаттар "Башҡортостан Республикаһының айырым закон сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проектына төҙәтмәләрҙе ҡараны.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2015 йылда закон проекты төбәк прокуроры тарафынан ҡарауға индерелде һәм Рәсәй Ғаилә кодексының 13-сө статьяһын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелде. Уның буйынса айырым осраҡтарҙа - йөкләлек йәки бала тыуғанда 16 йәшкә тиклем никахҡа инергә мөмкин. Башҡа сәбәптәрҙән дә булыуы ихтимал. Мәҫәлән, "үсмерҙәрҙең ғаилә мөнәсәбәттәре". Шулай уҡ проект опеҡа һәм попечителлек органдары һәм тикшереү органдары вәкилдәренең балиғ булмағандарҙың бергә йәшәү мөмкинлеге тураһында мәсьәләне хәл итеүҙә мотлаҡ ҡатнашыуын һәм Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетының ошо ҡарарҙы ҡабул итеүен күҙ уңында тота.

"Ғаилә кодексына ярашлы, 1996 йылдан алып Башҡортостанда 16 йәше тулмаған үсмерҙәрҙең никахҡа инеү мөмкинлеге бар. Йылына шундай 10-20 никах теркәлә. Төбәктә бындай социаль күренеш бар, һәм беҙгә уны көйләргә кәрәк, - тип билдәләне Башҡортостан прокурорының өлкән ярҙамсыһы Руслан Исмәғилев. - Әлегә тиклем ошо процедураны башҡарыу тәртибе билдәләнмәгәйне. Закон проектының концепцияһы никахҡа инеү тәртибен яйға һалырға тәҡдим итә. Опека һәм попечителлек органы үткәргән тикшереү нигеҙендә һәм ике шарт - йөкләлек һәм бала тыуғанда ғына республиканың башҡарма власть органы никахҡа инергә рөхсәт итә. Закон проектының янылыуы шунда. Закон никах йәшен кәметмәй һәм билдәләмәй, бары тик 16 йәшкә тиклем никах теркәү процедураһын көйләй. Закон ҡабул ителеү менән 16 йәше тулмағандар араһында никахтар аҙыраҡ булыр, тип ышанам. Әле уҡ иртә өйләнешеүселәрҙең кәмеүе күҙәтелә - былтыр уларҙың һаны 14 булған".

Рәсәйҙең 22 төбәгендә, шул иҫәптән Мәскәү, Нижегород өлкәләрендә, Татарстанда ошондай закондар ҡабул ителгән дә инде.

# ХАЖҒА БАРЫУСЫЛАР ИҒТИБАРЫНА



**Былтыр декабрь айында Өфөлә Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ҡарамағында хаж буйынса комитет асылды. Ул республика мосолмандарына изге урындарға - Мәккә ҡалаһына һәм уның эргәһенә хаж ҡылырға ярҙам итеү өсөн булдырылған.**

Быйыл хаж август аҙағында уҙа. Бөтә мосолмандар өсөн мотлаҡ булған хаж ҡылыу урындарына әҙерлек кампанияһы башланған да инде. Республика мөфтиәте хажға барыуҙы ойоштороу менән шөғөлләнәсәк берҙәм операторҙы билдәләгән, ул - "Урал сервис". "Хаж буйынса урындағы берҙәм операторҙы һайлау ойоштороу процесын яйайы уҡ еңеләйтәсәк. Хаж ҡылырға теләүселәр мәсеттәрҙә урындағы имамдар аша ғариза тапшыра ала. Был осраҡта мөфтиәт туроператор менән ғибәҙәт ҡылыусы араһында гарант булып торасаҡ, ул ышанысլылыҡты ла тәьмин итергә тейеш", - тип һөйләне Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының хаж буйынса комитет етәксеһе Илшат Хафизов. Диндарҙарға ике программа тәҡдим ителә: "эконом" һәм "стандарт". Стандарт программаһына Сәғүд Ғәрәбстанына осоу, Мәккә һәм Мәҙинә отелдәрендә йәшәү, хаж ҡылыу нигеҙҙәренә өйрәтеү һәм экскурсиялар инә. "Эконом" программаһын һайлаусыларҙы Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә хәтлем осоу көтә. Хаж ҡылыу урынына, Сәғүд Ғәрәбстанына автобустарҙа барырға тура киләсәк. Ике программала ла төркөмдә медицина хеҙмәткәренең булыуы шарт. "Стандарт" программаһы 150 мең һумға барып баҫасаҡ, "эконом" - байтаҡҡа осһоҙ, 105 мең. Был - Рәсәй буйынса иң түбән хаҡтар. Әлеге ваҡытта тур һатып алыу ниәте менән республиканан 180 кеше хаж буйынса комитетҡа мөрәжәғәт иткән. Башҡортостандан Мәккәгә йәмғеһе 300 кеше барасаҡ. Сәғүд Ғәрәбстаны Рәсәй өсөн быйыл 20 меңдән ашыу кешелек квота бүлгән.

# ҠОРАЛЫҢ БАРМЫ? ТАПШЫР!



**Республикала Рәсәй Милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы ойошторған "Ҡоралыңды тапшыр һәм аҡса ал!" оператив-иҫкәртеү операцияһы башланды. Ул 3 мартҡа тиклем дауам итә.**

Акцияның маҡсаты - атыу ҡоралы, уның төп өлөштәре, боеприпастар, шартлаҡкыс матдәләр һәм шартлатыу ҡулайламаларының законһыҙ әйләнешен иҫкәртеү, енәйәттәр һанын кәметеү. Теркәлмәгән ҡоралды үҙ ирке менән тапшырған өсөн аҡсалата бүләкләү ҡаралған. Һунар мылтығы өсөн 10-15 мең һум түләнә. 2016 йылда Рәсәй Милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығындағы Лицензия-рөхсәт биреү эштәре үҙәгенә граждандарҙан 324 берәмек ҡорал, 11512 дана боеприпас, 7256 грамм шартлаҡкыс матдәне ҡабул итеү тураһында өс йөҙҙән ашыу ғариза килгән. Граждандарға компенсациялар суммаһы 3 миллион 462 мең 583 һум тәшкил иткән. Законһыҙ ҡоралды үҙ ирке менән тапшырғандар енәйәт, шулай уҡ административ яуаплылыҡтан азат ителә, тип аңлатма бирҙеләр Милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығындағы матбуғат хеҙмәтендә. Ҡоралды эске эштәрҙең территориаль органдарына йәки "Росгвардия"ның Башҡортостан идаралығындағы Лицензия-рөхсәт биреү эштәре бүлектәренә килтерергә кәрәк. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8 (347) 279-45-34, 273-59-28, 279-47-75 телефондары буйынса алырға мөмкин.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республикала ҙур Агросәнәғәт форумына һәм XXVII халыҡ-ара махсуслашҡан "Агрокомплекс" күргәҙмәһенә әҙерлек башланды. Улар 14 марттан 17-нә тиклем Өфөләге "ВДНХ-Экспо" майҙансығында уҙа. Башҡортостан Хөкүмәте ҡабул иткән документҡа ярашлы, сара агросәнәғәт комплексында яңы етештереү технологияларын үҙләштереү, үҙ-ара отошло килешеүҙәр төҙөү, аҙыҡ-түлек баҙарын ауыл хужалығы продукцияһы һәм тукланыу продукттары менән ҡәнәғәтләндереү, шулай уҡ ауыл хужалығы продукцияһын эске һәм тышҡы баҙарҙарға һатыу каналдарын үҫтереү маҡсаты менән ойоштоpола.

✓Өфөлә Континенталь хоккей лигаһының туғыҙынсы миҙгелендәге даими чемпионаттың һуңғы уйыны уҙҙы. "Салауат Юлаев" менән Тольяттиҙың "Лада" араһындағы көрәштә миҙгелдә өсөнсө тапҡыр 4:2 иҫәбе теркәлде. Быныһында өфөләр еңеү яуланы. "Салауат" 88 мәрәй йыйҙы һәм Гагарин кубогының 1/8 финалында Ҡаҙандың "Ак Барыҫ"ы менән осрашасаҡ.

✓Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан Өфөнөң халыҡ мәшғүллеге хеҙмәте 2 мартта йәштәр һәм бәләкәй балалары булған ҡатын-ҡыҙҙар өсөн вакансиялар йәрминкәһе уҙғара. Йәрминкәлә администратор, бармен, әйҙәүсе һәм баш белгес, балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, табип-терапевт, хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ, диспетчер, инженер, кондуктор, консультант, курьер, менеджер, шәфҡәт туташы, кесе тәрбиәсе, официант, ашнаҡсы, һатыусы, суд приставы һәм башҡа һөнәр вакансиялары тәҡдим ителәсәк. Йәрминкәне үткәреү урыны һәм ваҡыты: Ибраһимов бульвары, 47/1, иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 12-гә тиклем.

✓Австрияның Хохфильцен ҡалаһында биатлон буйынса донъя чемпионатында 7,5-шәр саҡрым дүрт этапта ирҙәр эстафетаһы уҙҙы. Өфөнән Антон Бабиков, шулай уҡ Алексей Волков, Максим Цветков һәм Антон Шипулин Рәсәй йыйылмаһында алтын миҙалдар яуланы. Көмөш миҙалдар - французҙарға. Бронза наградалары Австрия йыйылмаһына тейҙе.

✓Башҡортостанда "Һуғыш хаҡында шиғырҙар менән" тасуири уҡыусылар интернет конкурсы иғлан ителде. Конкурстың ойоштороусыһы - республика Хәрби Дан музейы, унда алты йәштән алып 18 йәштәгеләр ҡатнаша ала. Конкурсҡа шиғыр яҙмаһы менән видеороликтарҙы 31 майға тиклем ебәрергә кәрәк. Ҡатнашыу тураһында ғаризаларҙы rmbs_prosvet.otd@mail.ru электрон почтаһына йүнәлтергә кәрәк.

✓ *"Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте - 2017" конкурсының төп еңеүсеһе исемен 88-се мәктәп уҡытыусыһы Гөлсәм Монасипова алды.*



АФАРИН!

**Ошо көндәрҙә Өфөлә егерменсе тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы" һәм ун өсөнсө тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстарына йомғаҡ яһалды. Һөнәри конкурста еңеүсе Өфө педагогтарын БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов тәбрикләне.**

# БӘЙГЕ ТОТТОЛАР...

## шәп уҡытыусы тигәнде раҫларға



"Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2017" конкурсында йөмғеһе 47 уҡытыусы ҡатнашты. Йылдағыса, өс этаптан торған конкурс барышында педагогтар тупланған хеҙмәт тәжрибәһен, оҫталығын күрһәтте. Беренсе этапта уҡытыусыларҙың интернет сығанаҡтарын өйрәнеүен, эш һөҙөмтәләрен сағылдырған тупланмалар ҡаралды. Икенсе турҙа һәр береһе педагогик инициатива, методик семинар һәм асыҡ дәрес тәҡдим итте. Конкурстың был турҙарын уңышлы үткән педагогтар артабан оҫталыҡ дәресе күрһәтте һәм түңәрәк ҡорҙа баһалама ағзалары менән төрлө проблемалы темаларға бәхәс ҡорҙо.

"Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2017" конкурсында ҡатнашыусы егерме өс уҡытыусы араһынан һуңғы этапҡа ун өс педагог иң яҡшы һөҙөмтәләр менән үтте. Баһалама ағзалары һәм уҡытыусылар түңәрәк ҡор барышында "Дәүләт ике теллелеге: бөгөнгө күп милләтле йәмғиәттә сифатлы белем биреү һәм милләт-ара килешеүҙе һаҡлау проблемалары" темаһына фекер алышты. "Был фекер алышыуҙа баһалама ағзаһы, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев: "Киләсәктә илдә ниндәйҙер милләт-ара низағтар тыуа ҡалһа, тел уҡытыусылары ғәйепле буласаҡ", - тигәйне. Балаға уҡытыусы биргән рухи тәрбиәнең әһәмиәтен билдәләгән был һүҙҙәр бик уйландырҙы", - тине 101-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлфиә Миһранова был һөйләшеүҙәр ваҡытында. Бында шулай уҡ бәйгелә ҡатнашҡан уҡытыусыларҙың белем даирәһен, илдә һәм донъяла барған һуңғы ваҡиғаларға ҡарашын, мәғариф өлкәһендәге актуаль мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса күҙаллауҙарын һынарға булышлыҡ иткән һорауҙар яңғыраны.

- Был конкурста икенсе тапҡыр ҡатнашам, 2011 йылдан бирле конкурс шарттарына төрлө кәрәкле үҙгәрештәр индерелгән. Шуларҙың береһе - "Педагогик проект эше" оҡшаны. Был уҡытыусыларҙың командаға тупланып ижади эшләүгә һәләтлеген сағылдырҙы. Беҙҙең командалағы педагогтар менән китапты рекламалауға арналған проект эше башҡарҙыҡ. Йәш быуынды китап уҡыуға ылыҡтырыу, башҡорт әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыуға булышлыҡ итеү буйынса тәҡдимдәр индерҙек. Әйтергә кәрәк, һәр ижади төркөм теманы үҙе һайларға ирекле ине, был шулай уҡ милли мәғариф өлкәһендәге уҡытыусыларҙы борсоған мәсьәләләргә иғтибар йәлеп итеүгә лә булышлыҡ итерлек конкурс этабы булды, - тине һөнәри конкурстың бөтә һынауҙарын лайыҡлы үткән баш ҡаланың алдынғы педагогтарының береһе Эльвира Ишморатова. Конкурстарҙы йомғаҡлау тантанаһы барышында педагогтарҙы бер нисә номинацияла наградланылар. "Оҫта педагог" номинацияһында - һигеҙ, "Тикшеренеүсе педагог" номинацияһында егерме туғыҙ уҡытыусы Өфө ҡала хакимәте башлығының Маҡтау грамоталары менән билдәләнде. "Педагогик өмөт" номинацияһында Өфө ҡалаһының 95-се мәктәбе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Юлай Сәлимгәрәев, "Педагогик дебют"та - 93-сө гимназияның тарих уҡытыусыһы Эльвира Йәмғетдинова, "Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы"нда - 156-сы мәктәп уҡытыусыһы Регина Закирова, "Татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" номинацияһына М. Шайморатов исемендәге 104-се мәктәп уҡытыусыһы Венера Садиҡова айырым баһалауға лайыҡ тип табылды. "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте - 2017" конкурсының төп еңеүсеһе исемен 88-се мәктәп уҡытыусыһы Гөлсәм Монасипова алды. Ә бына "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2017" конкурсында 52-се лицейҙың "Донъя художестволы мәҙәниәте" предметы уҡытыусыһы Юлия Линдт еңеүсе тип табылды.

Шулай уҡ конкурстың абсолют еңеүсеһе лә билдәләнде. Был награданы М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының инглиз теле уҡытыусыһы Мария Кәримова (һүрәттә) яуланы. Әйткәндәй, ул конкурсанттар араһында иң йәш педагогтарҙың береһе булып сыҡты. Йыл ярым хеҙмәт стажы туплап, мәртәбәле бәйгелә ҡатнашырға йөрьәт иткән уҡытыусы ҙур тәжрибә алыуы һәм киләсәктә һөнәренә тоғро ҡаласағы тураһында белдерҙе.

- Конкурс ойоштороусыларҙың да, ҡатнашыусыларҙың да юғары әҙерлеге таң ҡалдырҙы. 2000 йылда тәүге тапҡыр ҡатнашҡан саҡта был бәйгенең асылына төшөнмәгәнмен кеүек, бында еңеү улар өсөн үҙемдең өлгәрөп етеүем шарт булған, - тине "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2017" конкурсы еңеүсеһе Гөлсәм Монасипова тәьҫораттары менән уртаҡлашып. - Уҡытыусы булып эшләү дәүеремдә "Башҡортостан тарихы", "Башҡортостан географияһы", "Тормош һабаҡтары", хатта "Рус теле" предметтарын да өйрәтергә тура килде. Былар барыһы ла миңә бөгөн уҡыусылар, коллегаларым һәм юғары компетентлы баһалама ағзалары алдында ла үҙемде мәғлүмәтле, киң даирәле, ышаныслы итеп тойорға, уртаҡ тел табырға ярҙам итте. Конкурсҡа әҙерлек барышында төрлө оҫталыҡ дәрестәре ойошторған, төрлө яҡлап ярҙам иткән методистарға, коллегаларыма рәхмәтлемен...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө ҡалаһының иң яҡшы уҡытыусыларының хеҙмәтен лайыҡлы баһаларға, яңы ғына ошо эшкә үҙен бағышларға торған йәш педагогтарҙы дәртләндерергә мөмкинлек биргән был конкурстың әһәмиәте ҙур. Быны етәкселәребеҙҙең дә аңлауы ҡыуаныслы. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың: "Конкурста ҡатнашыусы һәр уҡытыусыға Гран-при тапшырырлыҡ, һеҙ баш ҡаланың ғорурлығы", - тигән һүҙҙәре быға дәлил. Бына инде егерме йыл педагогтарға үҙ көсөн һынап ҡарарға юлдар асҡан конкурс киләсәктә лә Өфөнөң белем усаҡтарында алһыҙ-ялһыҙ эшләгән белгестәребеҙгә тәжрибә уртаҡлашыр, һөнәри оҫталығын күрһәтер, яңы үрҙәр яуларға старт бирер майҙансыҡ булып ҡалһын.**



**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡул һыҙлаһа...

❖ Ҡул талһа, һеңер тартылып китһә, 1 ҡалаҡ ондо йомортҡаның ағы менән болғарға, шуға 1 ҡалаҡ спирт йәки араҡы ҡушырға. Ҡатнашманы етен йәки кизе-мамыҡ туҡымаға һылап, ауыртҡан ергә тығыҙ итеп бәйләргә. Көн һайын яңынан әҙерләп бәйләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Юғары ҡан баҫымынан

❖ 17 бүлем һарымһаҡты 3 стакан һыуға һалып, 2-шәр ҡалаҡ 9 процентлы аш һеркәһе һәм бал ҡушырға, ут өҫтөндә тотоп ҡайнатып сығарырға. 3 минуттан һөҙөргә, ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс, 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

### Бүҫер

❖ Бүҫер булһа, бүҫер үләнен (грыжник) парҙа тоторға ла, бүҫер сыҡҡан урынға ябырға.

❖ 500 мл һыуҙа 3 балғалаҡ күкбаш (василек узкочешуйчатый) сәскәһен төнәтеп, көнөнә 2 стакан эсергә.

### Мастопатия

❖ Аҡ башлы кәбеҫтәнең эске япраҡтарын ағас менән һуҡҡылап йомшартырға ла, бал һыларға һәм көн һайын күкрәккә ябып, 2-3 сәғәт тоторға, оҙон таҫтамал менән урап ҡуйырға. 2-3 айҙан файҙаһын тойорһоғоҙ.

### Тимер етешмәһә...

❖ Ашар алдынан бал менән һарымһаҡ ҡушылған ҡатнашма ҡабып ҡуйырға кәрәк.

❖ 1 стакан йөҙөмгә 1 стакан әстерхан сәтләүеге, 1 стакан бал һәм 1 ҙур лимондың һутын ҡушып ашарға була.

❖ Кистән бер ус йыуылған йөҙөмдө 1 стакан ҡайнар һыуға һалып ҡуйығыҙ һәм иртәнсәк урындан да тормайынса шуны ашап, һыуын эсегеҙ. Гемоглобинды яҡшы күтәрә.

### Люмбаго

❖ Бил тәнгәлендәге кисҡен ауыртыу өйәнәге мәлендә әремде үсемлек майына һалып бешерегеҙ ҙә, шунын менән аппликация эшләгеҙ. Сама менән өс процедуранан ауыртыу бөтөр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Малайҙарҙа буласаҡ ир-егеткә хас сифаттарҙы мөмкин тиклем иртәрәк тәрбиәләй башлау мөһим. Иң ярамағаны - малайҙарҙың инициативаһын һәр осраҡта ла һүндерә килеп, рөхсәт итмәү, тыйыу алымдарын йыш ҡулланыуҙыр.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

Көньяҡ-көнбайыш (дим) башҡорттары кейеме лә үҙенсәлекле. Был төбәккә юрматы, меңле, табындарҙың бер өлөшө, йәнәй, байлар, ҡайлы-ҡаршындар инә. Заманса административ бүленеш буйынса Ҡырмыҫҡалы, Ауырғазы, Стәрлетамаҡ, Миәкә, Стәрлебаш, Бишбүләк, Әлшәй, Дәүләкән, Бәләбәй, шулай уҡ Шишмә, Мәләүез, Федоровка, Бүздәк, Өфө районының бер өлөшө һәм республиканың төньяҡ-көнбайыш - Ырымбур өлкәһе менән сиге инә.

Был төбәктең костюмы үҙенең рационаллеге һәм уңайлы булыуы менән айырылып тора. Дим костюмы башҡа төбәк кейемдәренә ҡарағанда ҡыҫҡараҡ итеп беселгән. Туҡыма ла әҙерәк киткән, шуға ла был костюмдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар нескәрәк тә күренгән. Дим буйы костюмдары көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш райондары костюмдарының өлгөләрен үҙендә туплаған. Был кейемде бесеү өлгөләрендә лә күренә.

Дим еләндәре, дөйөм алғанда, көньяҡ-көнсығыш өлгөһөнә оҡшаған, ул трапеция йәки тура мөйөш формаһында беселгән, арҡала - урта тегеү йөйө, ә алда ҡаптырмалан тыш төймә юҡ **(һүрәт)**.



Дим буйы күлдәктәре, ҡағиҙә булараҡ, бер әберкәле. Төньяҡҡа ҡарай күлдәктәр киндерҙән тегелгән, шуға ла уны артыҡ ҡатламлы итеп текмәгәндәрҙер ҙә.



Урыны менән алъяпҡыс таҡҡандар, тик был яҡта ул костюмдың бер өлөшөнә әүерелмәгән. Улар ябай итеп тегелгән булыуы менән айырылып тора **(һүрәт)**.

Дим еләндәренең биҙәлеше ҡыҙыҡлы. Улар ысын көмөш тәңкәләр ҡулланған. Был тәңкәләр ныҡ ауыр булһа, 10 тин аҡса ҙурлығында һуғылған тәңкәләр еңелерәк булған. Башлыса батша заманы осоро аҡсаларынан торған тәңкәләр еләндең арҡаһына



ике төрлө вариантта - П-формаһында һәм ярымтүңәрәк итеп баҫылған **(һүрәт)**. Ә үҙҙәре һуҡҡан тәңкәләр кейемдең алғы өлөшөн биҙәү өсөн ҡулланылған. Йәғни, алғы яҡҡа күп итеп еңелерәк тәңкәләр баҫылған һәм шул рәүешле еләндең артындағы тәңкәләрҙең ауырлығына тигеҙләшкән. Арҡалағы тәңкәләр рюкзак һеҙөмтәһе биргән, арҡа арымаған, ә тәңкәләрҙе еләндең аҫҡы өлөшөнә баҫҡанда, уның ауырлығы тәндә арыта.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЕТДИ ҺӨЙЛӘШЕҮ

# АТАЙ ҒОРУРЛЫҒЫ - ИР БАЛАЛА ...

## йәки малайҙарҙы тәрбиәләү алымдары тураһында



➔ **Ғаиләлә ысын ир-егетлек тәрбиәһен ҡасанараҡ башлау ҡулай булыр?**

Билдәле педагог А.С. Макаренконың тәрбиә асылы тураһындағы мәҡәләләренең береһендә шундай диалог бирелгән:

- Баланы ҡасан тәрбиәләй башларға кәрәк?
- Балағыҙға нисә йәш һуң?
- Әле өс йәше генә тулды.
- Һеҙ балағыҙҙы тәрбиәләүҙә теүәл 3 йылға һуңға ҡалғанһығыҙ!

Малайҙарҙа буласаҡ ир-егеткә хас сифаттарҙы мөмкин тиклем иртәрәк тәрбиәләй башлау мөһим. Балалар үҙҙәренең малай йәиһә ҡыҙ затынан булыуын өс йәшкә тиклем үк айыра башлап, кешеләр араһында үҙ енесенә тәғәйен ролдә ете-һигеҙ йәшкә тиклем аңлы рәүештә үҙләштерә ала. Тап ошо осорҙа "ысын малай", "ысын ҡыҙ" тәрбиәһенә ныҡлы нигеҙ һалына. Малайҙар аңына көслө, етеҙ, уҙаллы, ныҡышмалы һәм ихтыярлы булыу, ауыртыуға түҙеү, сыҙамлылыҡ күрһәтеү, бер ниҙән дә ҡурҡмау, биргән һүҙендә ныҡ тотоу һымаҡ төшөнсәләрҙе һеңдереп, ошо юҫыҡта уларҙың ғәмәлдә күҙәтелгән ҡылыҡтарын, тойғо-кисерештәрен баһалап, билдәле йүнәлеш биреп тороу фарыз. Иң ярамағаны - малайҙарҙың инициативаһын һәр осраҡта ла һүндерә килеп, рөхсәт итмәү, тыйыу алымдарын йыш ҡулланыуҙыр.

Үҫмерлек осоро еткәс, бигерәк тә малайҙарҙың организмы енси өлгөрөү стадияһына күсеү менән, уларҙың ир-егеттәргә оҡшарға тырышыуы яңы психологик сифатҡа әйләнә. Тап ошо осорҙа физкультура һәм спорт, техник һәм хеҙмәт тәрбиәһе аша үҫмерҙәрҙә ир-егеттәргә хас булған сифаттарҙы үҫтереү өсөн ыңғай шарттар барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта үҫмерҙәрҙе ялған кумирҙар өлгөһөнән, ялған мәҙәниәт һәм тышҡы яҡтан ылыҡтырғыс стереотиптарҙан (тәмәке тартыу, һүгенеү, тупаҫ булып ҡыланыу һ.б.) ҡурсалау маҡсатында улар менән дуҫтарса, ололарса аңлашыу, уларҙы тиң күреп аралашыу ысулдарын табыу мөһим. Һәр малай ир-егетлек мәктәбе һабаҡтарын ваҡытында алған хәлдә генә башҡорт араһында лидерлыҡҡа ҡытлыҡ булмаҫ.

➔ **Ир-егетлек тәрбиәһендә атайҙарҙың роле нисек икән?**

Психологтар күҙәтеүенә ярашлы, әгәр атай кеше ғаиләһен улы биш йәш тулғансы ташлап китһә, улы егет ҡорона инеүгә уның үҙ мөмкинлектәренә ышаныу кимәле тулы ғаиләлә үҫкәндәрҙекенән күпкә түбәнерәк булып, йәштәштәренә бәйлеләге, буйһоноусанлығы ныҡ һиҙеләсәк. Ғөмүмән, балаларҙың енескә ярашлы ролдәрҙе үҙләштереүендә атай йоғонтоһо көслөрәк. Психологтар, атай кешенең ҡыҙ балаға ҡарата икенсерәк мөнәсәбәте ҡыҙҙарға ғына хас булған холоҡ-фиғелдең формалашыуына булышлыҡ итә, тип раҫлай. Ә бына малайҙарҙың аңында ир кеше образы башлыса аталарына оҡшап булып, киләсәктә уның ғаиләһендәге ролен билдәләйәсәк. Халҡыбыҙҙың "Атанан күргән - уҡ юнған", тиеүе лә ошо фекерҙе ҡеүәтләүсе бер дәлилдер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа яңғыҙ ғына бала тәрбиәләүсе әсәләр арта барғанлыҡтан, байтаҡ малайҙар атай тәрбиәһенән мәхрүм. Ошоға өҫтәп, тулы ғаиләләрҙә лә атайҙарҙың бала тәрбиәләүҙе башлыса ҡатындарына йөкмәтеүен, ә мәғарифта шул уҡ ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнлөк итеүен иҫәпкә алһаҡ, ир тәрбиәһенең юғала барыуын инҡар итеп булмай.

➔ **Йәмғиәттә ирҙәр шәхесендә ҡатын-ҡыҙға хас сифаттар арта барыуы, (уларҙың холоҡ йомшаҡлығы, үтә наҙлыға әйләнә башлауы, баҙаулығы, ихтыярһыҙлығы, лидерлыҡтан ваз кисеүе һ.б.) күҙәтелә. Ирҙәргә "ҡатынлашыу" ҡурҡынысы янамаймы һуң?**

Тәрбиә өлкәһенең тулыһынса тиерлек ҡатын-ҡыҙ ҡулында булыуын алдараҡ билдәләп киткәйнек. Ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә ҡатын-ҡыҙ өҫтөнлөк иткәс, тәрбиә, ғәмәлдә, ҡатын-ҡыҙҙарса башҡарыла. Улар малайҙарға ла, ҡыҙҙарға ла бер үк талап ҡуя, бер төрлө өлгөгә ярашлы тәртип урынлаштыра, тәрбиәләнеүселәрҙең үҙҙәрен башлыса ҡатын-ҡыҙ хуп күргәнсә тотоуын теләй, тәьҫир итеү ысулдары ла берҙәй ҡала бирә. Коллективта тыңлаусанлыҡ, баҫалҡылыҡ, буйһоноусанлыҡ өлгөһө булған ҡыҙҙар лидер ролендә йөрөй. Күп йылдар буйына ҡабатлана килгән талаптар малайҙар аңына үҙҙәрен тап ҡыҙҙарса тотоу ҡалыбын һеңдерә. Тап ошо сәбәптәр арҡаһында малайҙар тәбиғәтенә хас булмаған сифаттар уларҙың формалаша барыуысы шәхесендә урын ала ла инде. Бында ҡатын-ҡыҙҙың тәрбиәүи потенциалы һис тә инҡар ителмәй, ләкин, һәр хәлдә лә, ир менталитетында булғанды ҡатын-ҡыҙ ҡабатлай ҙа, махсус рәүештә тәрбиәләй ҙә алмаясаҡ. Һығымтабыҙ шул: малайҙарҙы, һис юғында, ирҙәр күберәк булған техника, хәрби эш, спорт, туризм кеүек өлкәләргә мөмкин тиклем иртәрәк йәлеп итеү отошло. Мәктәптәрҙә сыҙамлылыҡ, ҡыйыулыҡ, физик әҙерлек, ихтыяр көсөн, ойоштороу һәләтен, лидерлыҡ сифаттарын талап иткән тәрбиәүи сараларҙы бермә-бер арттырыу зарур.

➔ **Хәҙерге заманда ҡайһы бер ирҙәрҙең енси ориентацияһы үҙгәреүе ғәҙәти күренешкә әйләнә бара. Быны кешенең тәбиғи хоҡуғына тиңләп, ирҙәр ирһөйәрлеген (гомосексуализмды) законлаштырған илдәр ҙә байтаҡ хәҙер. Малайҙар тәрбиәһендә ошо күренеште иғтибарға алыу урынлымы икән?**

Ирһөйәрлек тәбиғәт ҡанундарына, кешеләрҙең ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, ғөмүмән, йәшәйеш ҡағиҙәләренә бер нисек тә тура килмәй. Ер йөҙөндәге барса диндәр был күренеште оло гонаһ, тип иҫәпләп, кешелек тарихы дауамында тыйыу әмәлен хуп күргән. Ысынлап та, гомосексуализм фән тарафынан да аномаль, бөтөнләйе менән нормаға һыймаған мөнәсәбәт, тип нарыҡлана. Психология, психопатология күҙлегенән быны үҙенә күрә бер биопсихик ауырыу, тип ҡарау дөрөҫ булыр ине. Ә сир бар икән, ул дауалауҙы, профилактика сараларын табыуҙы талап итә. Әлбиттә, бында мотлаҡ көс ҡулланыу тураһында һүҙ бармай. Ирҙең - ир, ҡатындың ҡатын булып ҡалыуы кешелек өсөн уның тәбиғи ҡанундарын боҙмай, үҙен-үҙе һаҡлау сараһы икәнен иҫтә тоторға кәрәк. Ирһөйәрлеккә, ҡатын-ҡыҙҙың лесбиянлыҡ мөхәббәтенә ҡаршы сығыу дөйөм кешелектең дә, айырым халыҡтарҙың да социаль экологияһын таҙа тотоуға тиң. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең йәмғиәт менталитетына, Ислам диненә тура килмәгән ошо күренешкә беҙ күҙ йомоп ҡарарға өйрәнеп киттек. Әле һуң булмаҫ борон үҫеп килеүсе йәштәр араһында тейешле аңлатыу сараларын әүҙемләштереп, уларҙың шәхесендә гомосексуализмға ҡаршы иммунитетты ваҡытында булдырыу фарыз.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**
**(Аҙағы. Башы 7-се һанда).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ОЛУҒ ҒАЛИМЫБЫҘ ӘЙТКӘН ҺҮҘ,

## йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге

**"Тарихсыларҙың тарихты дөрөҫ итеп яҙыу кеүек ауыр эше бар. Ышаныслы тарих йәки хәҡиҡәт бик күп тарихи мәғлүмәттәрҙе үтә нескә иләк менән иләгәндән һуң ҡалғандарҙан ғына хасил була ала", тигән Әхмәтзәки Вәлиди. Тарихты һәм тарихсының ролен юғары баһалаған һүҙҙәренә раҫ итеп, ғалимдың башҡорттарҙың тарихы һәм этнографияһы буйынса хеҙмәттәренән өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**



1914 йылда Петербургта булған сағында Ә. Вәлиди башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың һәм нуғайҙарҙың этнографияһы һәм статистикаһы буйынса материалдарҙы өйрәнә. Ул күберәк Императорҙың география йәмғиәте Этнография бүлегендә һәм Рәсәй империяһы халыҡтарының этнографик картаһын төҙөү буйынса комитетында, Фәндәр академияһының архивында шөғөлләнә. Петербургта В. Бартольд В.В. Радловтың өйөндә үткәрелгән йыйылышта унан киләсәк пландары хаҡында һөйләүен һорай.

Ә. Вәлиди үҙ сығышында былай ти: "Бөгөн Рәсәй хакимлығында булған, Хазар диңгеҙенең көнсығышында һәм төньяғында йәшәгән төрки ҡәүемдәрҙең тарихын XVI быуаттан башлап бөгөнгө торошона тиклем өйрәнәм. Бының өсөн далала көн итеүсе ҡәүемдәргә, башҡорттарға ҡағылған закондарҙы һәм уларҙағы үҙгәртеүҙәрҙе, ер мәсьәләләренең тарихын, Щербина, Кузнецов, Румянцев, Скрупулев, Переплатчиков кеүек ғалимдар туплаған һәм ошо көндә 40-сы томы сыҡҡан, мөһим өлөштәре "Күсмә халыҡтар идараһы" архивтарында ҡулъяҙма хәлендә һаҡланған материалдарҙан башлыса ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ ерҙәре мәсьәләләрен тикшерҙем. Тарихты бөгөнгө тормоштан алып боронғо дәүерҙәргә тиклем аныҡ өйрәнеү яғындамын, дала халыҡтарының ижтимағи тормошон һәм этнографияһын тикшереү ысулдарын һеҙҙән өйрәнергә теләйем".

1925 йылда Ә. Вәлидиҙең ағаһы Ғәбдрәүефтең өйөн тентегәндә ғалимдың шәхси китапханаһын, шул иҫәптән ҡулъяҙмаларын алып китәләр. Был ваҡиғаға тиклем Вәлидиҙең Анкараға ебәрелгән алты төргәк ҡулъяҙмаһы Совет хөкүмәтенә эләгә. 1925 йылдың 24 декабрендә Сталин исеменә яҙылған хатында ул "Советтар һәм большевизм нимә икәнлеген дә ишетмәгәндә яҙған" фәнни ҡулъяҙмаларын ҡайтарыуҙарын һорай. Вәлиди үҙенең хеҙмәттәренә ошондай баһа бирә: "Ҡулъяҙмалар - минең бөтә революцияға тиклемге тормошомдоң емеше". Шулай уҡ Ә. Вәлиди совет почтаһында алып ҡалынған төргәктәрҙе кире ҡайтарыуҙа ярҙам һорап, 1926 йылдың 13 мартында Төркиәнең сит ил эштәре министры Тәүфиҡ Рөштө исеменә лә хат яҙа. Был төргәктәрҙә ошондай материалдар булған: "Мәхмүт Ҡашғариҙың хеҙмәттәрен тикшереү", "Төркөстан тарихы", Төрки ырыуҙарының һаны буйынса статистик мәғлүмәттәр", "Төрки ҡәүемдәренең тарихы буйынса яҙмалар", "Төньяҡ Кавказ һәм Ҡырым ноғайлыларының тарихы", "Төркиҙәрҙә шаманизм", "Боронғо төркиҙәр тормошоноң ижтимағи ҡоролошон өйрәнеү өсөн материалдар", "Ойрат-ҡалмыҡтар тарихы", "Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ тарихы", "Көнсығыш Бохаралағы үзбәк ҡәбиләһе лаҡайҙарҙың фольклоры буйынса материалдар", шулай уҡ 1912-1916 йылдарҙа йыйылған "Нуғай, ҡырғыҙ һәм башҡорттарҙың фольклоры буйынса материалдар".

1916-1922 йылдарҙа Әхмәтзәки Вәлиди сәйәси эшмәкәрлеккә күп көс һала. Шуға ҡарамаҫтан, ул ғилми-тикшеренеү эшен дә ташламай, тарихи темаларға мәҡәләләр яҙа. Шул йылдарҙа төрлө гәзиттәрҙә уның имзаһы менән күп кенә документтар баҫылып сыға. Вәлидиҙең тура-нан-тура ҡатнашлығы менән "Башҡорт", "Башҡорт тауышы" тигән башҡорт милли гәзиттәре сыға башлай.

1920 йылдың 12 мартында Башревком рәйесе Ә. Вәлиди ҡул ҡуйған ғаризала ошондай үтенес яҙылған: "Архивтарҙы, саф милли ҡаралтыларҙы, китаптарҙы, башҡорттарға ҡараған этнографик материалдарҙы, шулай уҡ ғәскәри частарҙың эштәрен һәм архивтарын таларға бирмәҫкә, уларҙың барыһын да бер урынға йыйып һәм Башревком билдәләгән башҡорт кешеһенең береһенә, уның үҙенә һәм һаҡлаған әйберҙәренә һис тейелмәйәсәк, тигән шарт менән һаҡларға ҡушырға кәрәк".

Ә. Вәлидиҙең төрки тарихы буйынса тупланған белеме башҡорт халҡының милли-территориаль автономияһының төрлө проекттарын, карта-схемаларҙы әҙерләгәндә бик уңай була. Петроградта булғанда ул төрки халыҡтарының күсенеүе хаҡында мәғлүмәттәр менән танышырға мөмкинлек таба. 1915 йылда уҡ Ә. Вәлиди үҙенең "Ҡыҫҡаса төрки-татар тарихы" китабының инешендә төрки тарихы буйынса йүнле атластың булмауына зарлана һәм ошо бушлыҡты тултырырға теләүе хаҡында хәбәр итә.

Бөгөнгө көндә Кесе һәм Оло Башҡортостандың ғәрәп графикалы карта-схемаһы данаһы Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө Фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана, Оло Башҡортостандың кириллицалағы картаһы - Башҡортостан Республикаһы Милли музейы фондтарында, "Көнсығыш Рәсәйҙең автономиялы мосолман өлкәләре союзы"ның картаһы Ә.В. Туғандың "Хәҙерге Төркөстан һәм уның яңы тарихы" исемле китабында баҫылып сыға.

Революция ваҡытында башҡорт ғәскәрҙәре Ҡыҙыл Армия яғына күскәс, уларҙың бер өлөшө Петербургка ебәрелә. Ғәскәр менән бергә Ә. Вәлиди ҙә китә. Унан Башҡортостанға төрлө ғилми әсбаптар, дарыуҙар, баҫма станоктар, машинкалар, ҡоролмалар ебәрә. Украина фронтынан да шундай уҡ әйберҙәр оҙатыла. Петербургтан бер нисә китапхана сығарыла. Башҡортостанда эшләү өсөн белгестәр ҙә саҡырыла. Ә. Вәлиди менән Абдулҡадир Инан Салтыков китапханаһында һәм Фәндәр академияһының китапханаһында һаҡланған, һирәк осрай торған тарихи китаптарҙың күсермәләрен ала.

1914 йылда Абдулҡадир Инандың (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) "Шура" журналында (5-се һаны) баҫылып сыҡҡан "Башҡорт йәйләүендә" исемле хикәйәһе Ә. Вәлидигә бик оҡшай һәм ул авторға хат яҙа. Адресын белмәйенсә, хатты журналдың редакцияһына ебәрә, унан хат Абдулҡадир Инанға барып етә. Уның хаты А. Инанды рухландырып ебәрә һәм ул тағы ла ҙур тырышлыҡ менән башҡорт халҡының тарихы буйынса хеҙмәттәрҙе өйрәнә башлай. Ә. Вәлиди менән А. Инан беренсе тапҡыр 1918 йылдың июнь айы башында осрашалар. 1923 йылда улар бергә сит илгә сығып китәләр. Сит илдә йәшәгән йылдарының байтаҡ өлөшөн Төркиәлә үткәреләр, йыш осрашып торалар. А. Инандың һүҙҙәре буйынса, Ә. Вәлиди уның башҡорт милли хәрәкәте тарихсыһы булыуын һәм тюркология менән шөғөлләнеүен дауам итеүен бик теләгән.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

**(Аҙағы. Башы 5, 7-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 3. Ыҡ (ирәкле) батшалығы

Ыҡ батшалығы башҡорттарын IX быуаттан алып XVI быуатҡа тиклем ирәклеләр (ирәктеләр) тип атағандар. Ҡаратабын (ирәкте) башҡорттары шәжәрәһенә ярашлы, ҡаратабындар Ыҡ йылғаһының ике яҡ ярында йәшәп, Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан һуң, Ыҡ (Ицкими) улысында йәшәүселәр булып иҫәпләнә башлағандар. Ә алдараҡ, беҙҙең эраның I меңйыллығында бында фин-уғыр ҡәбиләләре йәшәгән. Ыҡ йылғаһы буйының төп ҡәбиләләрен бүләрҙәр, юрмыйҙыр, байлар, ирәктеләр тәшкил иткән. Бүләрҙәр үҙҙәре ике ырыуҙан - мышығаларҙан һәм ҡадырҙарҙан торған. Байларҙың өс ырыуы иҫәпләнгән: сураш, салағуш, ҡалмыш, байлар көнбайышта юрматылар менән сиктәш йәшәгән. Ыҡ йылғаһы юрмыйҙырҙың сиген билдәләп аҡҡан, уларҙан көнсығыштағы ерҙәрҙе нуғайҙар биләгән. Йылға аша улар бер-береһенә уҡтан атышҡан. Юрмыйҙар ҡатайҙар менән күршеләш булған. XIII-XIV быуаттарҙа был ерҙәр уларҙыҡы иҫәпләнгән. Риүәйәттәрендә юрмыйҙар үҙҙәренең күп кенә ата-бабалары ҡатайҙар менән бергә төньяҡҡа һәм көнсығышҡа - Ағиҙел арьяғына китеүе хаҡында һөйләй.

Ыҡ батшалығы дәүләт ҡоролошон тәшкил иткән. Тарихсылар киләсәктә үҙҙәренең хеҙмәттәрендә быны иҫбатлар, тип уйлайым. Ирәкте башҡорттары ата-бабалары боронғо замандарҙа Тубыл һәм Иртыш йылғалары буйында көн күргән, һуңынан улар Миәс йылғаһы буйына күсенгән. Оҙаҡ ваҡыт буш ятҡан ерҙәрҙе эҙләгәндән һуң улар Урал алдының киң майҙандарында, хәҙерге Татарстандың Минзәлә, хәҙерге Башҡортостандың Бөрө районында йәшәй башлай. Ғәли Соҡорой ҡәбиләләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте хаҡында ентекле итеп яҙып ҡалдырған, уның ҡулъяҙмаларында көньяҡ Уралда барған бик күп ваҡиғалар риүәйәттәр, мифтар рәүешендә теркәлгән. М. Өмөтбаев үҙенең "Башҡорттар" тигән хеҙмәтендә Мөйтән бейҙең улы Үҫәргәндең улдары нисек итеп дүрт Үҫәргән улысын барлыҡҡа килтереүе тураһында яҙа (Рәсәйҙең Географик йәмғиәте архивы). Үҫәргәндең улы - Шиғәле, табындарҙан - Майҡы бей. Ирәкте нәҫеле табын башҡорт ырыуының көнбайышҡа бүленгән өлөшө. Улар Ҡаҙан ханлығы сигендә гарнизон хеҙмәтен башҡарған. Ғәли Соҡоройҙоң шиғри дәфтәрендә: "Минең ата-бабамдың тыуған ере - Тубыл һәм Иртыш буйы",- тип яҙылған.

Ысынлап та, өсәндәрҙең (уйшин) ерҙәре Иртыштың юғары ағымында булған. Һуңынан өс өлөштән торған Майҡы бей олоҫо монгол ғәскәрҙәре сафында Урта Азияла һәм көнсығыш Европала, Миәс йылғаһы буйындағы Миндәк тигән урында төпләнеп ҡалғансы һуғышҡан. Шул мәлдән, яҡынса XIII - XIV быуаттарҙа, табындарҙың башҡорт халҡы составына инеүе хаҡында һүҙ алып барырға була. Табындарҙың ҡаҙаҡтарҙың Кесе Урҙаһында ла (Кесе Жуз) төркөмө булған. Себер татарҙары составындағы табындар - үҙ ваҡытында Күсем ханға хеҙмәт итергә барыусылар.

**(Дауамы бар).**

**✓ Эшеңдең бар нескәлектәрен үҙләштереп, башҡаларҙы артта ҡалдырҙың икән, ярышыр, тиңләшер кеше ҡалманы, тип борсолма. Үҙең менән, үҙеңдең кисәге уңыштарың менән ярыш, кисәге уңышһыҙлыҡтарыңдан фәһем ал.**

# СИТ ТӨБӘКТӘ,

## ТОТОШ МИЛЛӘТ

### РӘМИЛ БИКҠУЖИН:

*Беҙҙең ҡайтыу-ҡайтмау мәсьәләһенең нисек хәл ителеренә йоғонто яһарлыҡ тағы бер фактор бар. Ул фактор: "Кем сүрәтендә ҡайтырға, кем булып эш башларға?" - тип атала. Эш шунда: ҙур, ҡыҙыклы мәсьәләләрҙе сисеп өйрәнелдә, хәҙер инде килеңе эш урынымда бәләкәйерәк мәсьәләләргә кире ҡайтҡы килмәй. Төрлө урындарҙа эшләп ҡарап, идара өлкәһендә лә ярайһы уҡ тәжрибә тупланылды, бәлки, ниндәйҙер дәүләт идараһы өлкәһендә үҙемде һынап ҡарау маҡсатҡа ярашлы булыр.*



(Башы 1-се биттә).

**Рәмил, ниңә күп кенә йәш белгестәр үҙҙәренең тормоштағы урынын ситтә эҙләй? Ситкә киткән йәштәрҙең барыһы ла һәйбәтерәк йәшәй башлаймы? Ситтә ысынлап та яҡшымы, ә Рәсәйҙә, Башҡортостанда хәлдәр шулай уҡ насармы, был турала һеҙ ни уйлайһығыҙ? Аныҡ һеҙҙең миҫалды алғанда, һеҙҙең ситкә сығып китеүегеҙҙең төп сәбәбе ниҙә?**

- Һәйбәт йәшәү төшөнсәһен һәр кем үҙенсә аңлай. Беҙ йәшәгән һәр ҡаланың, һәр төбәктең үҙенә генә хас ыңғай һәм кире яҡтары булды. Мин Үҙәк, Волга буйы, Урал федераль округтарын арҡырыға-буйға йөрөп сыҡҡан кеше булараҡ, Башҡортостаныбыҙҙың, Өфөнөң өҫтөнлөктәрен таныйым. Ғәҙәттә, хәҙер йәштәр үҙҙәренең мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыу юлын ситтән эҙләй һәм, ысынлап та, юғары ҡаҙаныштарға өлгәшә. Мин дә үҙ алдыма ҡуйған маҡсатыма өлгәшә алыуымды ситтә, төрлө шарттарҙа һынап ҡарау теләге менән яндым. Шуға ла республикамдан ситкә күсеүемдең маҡсаты - карьера булдырыу, тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ мәсьәләләрҙе сисергә өйрәнеү һәм маркетинг буйынса директор вазифаһын бар тулылығында атҡара алыуымды дәлилләү ине.

Икенсенән... Иҡтисади үҫеш йәһәтенән Башҡортостан кәсле төбәк. Тик Башҡортостанда ҙур компанияларҙы йәлеп итеү, йәштәргә яңы эш урындары булдырыу һүлпәнерәк алып барыла. Рәсәйҙәге эре компанияларҙың макро-төбәк үҙәктәре Һамарҙа һәм Түбәнге Новгород ҡалаһында урынлашҡан. Һуңғы йылдарҙа Ҡаҙан да ҙур компаниялар офистарын үҙендә астырыу йүнәлешендә әүҙем эшләй. Башҡортостанда был эш ниңәләр яйыраҡ бара һымаҡ. Шунлыҡтан, беҙҙәге хеҙмәт хаҡы кимәле айырыла ла инде. Әлеге айырма МТС компаниялар төркөмө эсендә лә айырым-асыҡ сағыла. Йәғни, Һамарҙа, Түбәнге Новгородта урынлашҡан МТС офистарында хеҙмәткәрҙәр башҡа офистарҙа эшләүселәрҙән байтаҡҡа юғарыраҡ эш хаҡы ала. Был айырмалыҡты йәштәр күрмәй буламы? Күрә, әлбиттә. МТС бәйләнеш селтәре үҙ хеҙмәткәрҙәре алдына ниндәй талап ҡуя, тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, тәү сиратта, йәштәрҙән фиҙаҡәрлек талап итә. Тырыш хеҙмәткәр, үҙен дөйөм эшкә бағышлай белгән кеше бөтөн ерҙә лә алтын бәрәбәренә һаналана. Әммә был сифатың менән генә әлеге компанияла уңышҡа өлгәшә алаҫаҡһың тип уйлау бер ҡатлылыҡ булыр ине. Фиҙакәрлек - уңыштың яртыһы ғына. Тағы ла уңышлы эш өсөн үҙеңдә шәхес сифаттарын үҫтерергә, тәжрибәгә, ҡеүәткә, һығылмалыҡҡа өлгәшергә кәрәк буласаҡ. МТС-тың тулы ҡанлы хеҙмәткәре булып етешеү өсөн оҙайлы командировкаларға ла әҙер булырға тейешһең. МТС компаниялар төркөмөндә эшләү йылдарында миңә лә Рәсәйҙең Һамар, Воронеж, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында йәшәргә һәм эшләргә тура килде.

**Күреүебеҙсә, һеҙ үҙ алдығыҙға ҡуйған барлыҡ маҡсаттарығыҙға өлгәшкәнһегеҙ. Артабан ниндәй үрҙәр яуларға ниәтләйһегеҙ?**

- Бөтөн маҡсаттарҙы ла тормошҡа ашырмағанбыҙҙыр әле. Төбәк кимәленән ил кимәленә сыҡтыҡ. МТС-тың тотош ил маркетингын етәкләйем. Артабанғы баҫҡыс - "СЕО" дәрәжәһе. Ябай тел менән әйткәндә, МТС компаниялар төркөмөнөң макро-төбәк генераль директоры...

29 йәшемдә миңә Воронежда "Үҙәк" макро-төбәгенең ваҡлап һатыу итеү селтәрен етәкләргә тәҡдим иттеләр. 16 төбәкте үҙ эсенә алған "Үҙәк" макро-төбәгенең ҡала шөптән түгел ине. Ул ике йыл рәттән Рәсәй макро-төбәктәре араһында килеме, һатыу күләме буйынса иң аҙаҡҡы урында килгән булған. "Ауыр участканы Бикҡужин да етәкләй алмаҫ, үҙ теләге менән ул да был вазифанан китер", - тип юраусылар булған, хатта кемдер бәхәс тә ойошторған, тинеләр. Ә мин тәүге көндән үк: "Хәлде яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тейешмен", - тигән маҡсат ҡуйҙым үҙемә. Ни тиһәң дә, 320 магазин, 1500 һатыусы, 300-ҙән ашыу бэк-офис хеҙмәткәре менән етәкселек итергә кәрәк ине бит. Иңемә ниндәй ҙур яуаплылыҡ алыуымды үҙ ваҡытында аңлауым, ярты йыл самаһы эштән киске сәғәт 10-һыҙ ҡайтмай, ял көндәре ял итмәй эшләүем эҙһеҙ үтмәне - шул йылда 8 макро-төбәк араһында 2-се урынға сыҡтыҡ, килемде 60 процентҡа арттырҙыҡ. Коллегаларымдың ғәжәпләнеүенең сиге булманы. Тырышлығымды улар ҙа баһаланы: йыл аҙағында компания эсендә иң һөҙөмтәле эшләүсе етәксене билдәләү буйынса корпоратив тауыш биреү иғлан ителгәс, коллегалар миңә "Компанияның йондоҙо" тигән маҡтаулы исем бирҙе. Мин әле булһа уларға рәхмәтлемен һәм ошоға тиклем миңә бынан да ҡәҙерләрәк бүләк бирелгәне юҡ, тип һанайым. Әйткәндәй, миңә терәк, таяныс булыуы өсөн кәләшемә рәхмәт - уның тереге, арҙамы булмаһа, бөгөн һеҙгә һөйләгән уңыштарымдың береһе лә булмаҫ, мин бер ҡайҙа ла бармаған һәм бер нигә лә өлгәшмәгән булыр инем.

**"Эштә уңышҡа өлгәшеү буйынса Рәмил Бикҡужиндан алтын кәңәштәр" тигән китап яҙыу теләге тыуһа, һеҙ унда ниндәй кәңәштәрегеҙҙе индерер инегеҙ?**

- Эшенде ойоштороғанда күңел күтәренкелеге, үҙеңә ышанысты һаҡлау мөһим, ә иң мөһиме - уйҙарыңды, пландарыңды, маҡсаттарыңды, эш алымдарыңды сикләмәү. Күптәр үҙен-үҙе сикләп, харап була. Әгәр был тиклем һин эшләргә теләгән эште донъяла бер кем дә эшләп ҡарамаған икән, был ғына әле ул эште бөтөнләй эшләргә ярамай тигәнде аңлатмай. Шуны хәтергә киртеп ҡуйыу файҙалылыр. Тағы, күптәр коллегаларының, етәксеһенең, туғандарының, таныштарының, таныш булмаған кешеләрҙең тәнҡитенән, кәңәш бирә башларынан ҡурҡып, үҙ идеяһын тормошҡа ашырырға ҡурҡа. Әгәр һин үҙеңдең дөрөҫ юлда икәненә инанғанһың икән, тәнҡиткә иғтибар итмә, эшеңде башла. Йәки, әгәр ул һинең ҡарамаҡҡа әйтелгән тәнҡит урынлы, дөрөҫ икән, уны ҡабул ит тә, юлыңды артабан дауам ит. Әгәр ҙә инде "төртмә телдәр" бары тик һинә зыян эшләргә теләгәндән һөжүм итә икән, уларҙың һүҙенә иғтибар ҙа итмә. Ундайҙар һәр ваҡыт булған һәм буласаҡ.

Эшеңдең бар нескәлектәрен үҙләштереп, башҡаларҙы артта ҡалдырҙың икән, ярышыр, тиңләшер кеше ҡалманы, тип борсолма. Үҙең менән, үҙеңдең кисәге уңыштарың менән ярыш, кисәге уңышһыҙлыҡтарыңдан фәһем ал. Эшмәкәр бул. Воронежда эшләгәндә хеҙмәткәрҙәргә йыш ҡына "Ятып ҡалғансы, атып ҡал", ти торғайным. Йәғни, һинән әүҙем эшмәкәрлек талап ителгән ҡыҫҡа ғына ваҡытты икеләнеүҙәреңә баш була алмай үткәрмә, шул ваҡыт эсендә барлыҡ "ҡоралдарыңды" - ошо мәлде, аҡылыңды, оҫталығыңды, үҙең белгән ғилемде файҙаланып, ғәмәл ҡыл. Аҙағы өсөн борсолма. Эшләп ҡарап, хаталаныуың ҡул ҡаушырып ултырып, уңышһыҙлыҡҡа тарыуыңдан мең артыҡ.

**Милләттең хәле, йөҙө тураһында уның бер вәкиленә ҡарап та фекер йөрөтәләр. Ситтә йөрөгәндә һеҙ үҙегеҙҙе ниндәйерәк вәкил итеп күрһәтәһегеҙ?**

- Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, беҙ үҙебеҙҙең башҡорт кешеләре булыуыбыҙҙы әйтеп йөрөйбөҙ. Милләтебеҙҙе йәшермәйбеҙ. Башҡортостан тураһында бөтөнләй ишетмәгән кешеләр ҙә осраны. Күптәр башҡорттар тураһында ишетеп тә, бер тапҡыр ҙа күргәндәре булмай сыҡты. Мин уларға башҡорттар тураһында һөйләй йөрөйөм, үҙемсә мәғрифәт-ағартыу эше алып барам.

Ысынлап та, һеҙ хаҡлы - милләт тураһында уның бер кешеһенә, бер ғаиләһенә ҡарап та фекер төйнәргә була. Тәүҙә кешенең үҙе тураһында һығымта яһала, аҙаҡ, күпмеләр ваҡыттан һуң, милләте тураһында. Һинең һәйбәт йәки насар булыуың тотош милләтең ниндәй булыуы тураһында фекер уята. Беҙ, йәғни кәләшем Айгөл менән башҡа төбәктәргә күскән сағыбыҙҙа үҙ алдыбыҙға: "Милләтебеҙҙе бары тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтергә тейешбеҙ", - тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Өйҙә башҡорт телендә аралашабыҙ. Балаларыбыҙҙың исемдәре Әмир һәм Искәндәр - башҡортса яңғырай. Өлкән улыбыҙ ҡурайҙа уйнарға өйрәнеп йөрөй. Санкт-Петербургта йәшәгән сағыбыҙҙа башҡортса бейеү түңәрәгендә шөғөлләнде. Әмирҙең был башланғыстарын хуплауыбыҙҙы белдереп кенә торабыҙ. Ғаиләбеҙҙең үҙ ҡағиҙәләре лә бар. Беҙ сәләмәт тормош алып барабыҙ, спорт менән шөғөлләнергә тырышабыҙ, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү һымаҡ алама ғәҙәттәрҙән азатбыҙ. Өҫтәлебеҙҙән милли аш-һыуҙарыбыҙ өҙөлгәне юҡ. Коллегаларҙы, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән Ашхабадҡа килгән кешеләрҙе ҡунаҡҡа саҡырһаҡ, ҡатыным бишбармаҡ, ғөбәҙиә бешерә, өҫтәлгә тыуған яҡтарҙан килтерелгән бал ҡуябыҙ, үлән сәйҙәре эсерәбеҙ. Ҡунаҡтар бик ҡәнәғәт ҡала. Коллегалар менән башҡорт халҡының тарихы тураһында йәнле һөйләшеүҙәр ҙә ҡороп ебәрәбеҙ. Башҡорттарҙың бик боронғо халыҡ икәнен белеү айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уята уларҙа. Кемдер хатта башҡорттар тураһында интернеттан мәҡәләләр эҙләй башланы. Хеҙмәткәрҙәр йыш ҡына минең атай-әсәйем менән телефондан башҡортса һөйләшеүемде ишетә. Ҡайһы берәүҙәр: "Ә һеҙ ниндәй телдә һөйләнегеҙ ул?" - тип һорап ҡуя. Мин: "Башҡорт телендә", - тип яуаплайым...

Воронежда, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта ҡалған коллегалар менән дә бәйләнештәрҙе өҙмәйбеҙ. Уларҙың да беҙҙең турала, халҡыбыҙ тураһында бары тик яҡшы тәь-

✓ *Беҙҙең дә бынамын тигән идарасы йәштәребеҙ күп. Уларҙың күптәре төрлө эре-эре ҡалалар буйлап һибелгән. Уларҙы ҡайтарырға һәм республика ойошмалары эшенең һөҙөмтәлелеген арттырырға булыр ине.*



сораттар һаҡлауын беләм. Быны сәбәбе ябай - беҙ уларға башҡорт милләтен ыңғай яҡтан ғына күрһәтеүгә өлгәштек. Милләтте күтәреп, үҙебеҙҙе лә күтәрҙек. Башҡорттарҙы бығa тиклем бер тапҡыр ҙа осратмаған кешеләр эргәһендә һин үҙеңде насар яҡтан күрһәтә алмайһың, үҙеңде насар тота алмайһың. Өфөлә һин үҙеңде нисек теләйһең, шулай тота алаһыңдыр, бәлки, сөнки бында башҡорттар күп. Ә сит төбәктә һиңә ҡарап, тотош милләтең тураһында фекер йөрөтөүҙәрен аңлайһың. Был аңлау үҙенән-үҙе килә лер, тип уйлайым, хәйер, белекһеҙ кешеләр бөтөн ерҙә лә бар инде ул. Уларһыҙ ҙа донъя йәмһеҙ.

**Заманға ярашлы һөнәргә эйәһегеҙ, заман талаптарына яуап биргән һөнәрҙәр тураһында, һөнәрҙең әһәмиәте тураһында ни әйтерһегеҙ? Әле мәктәп партаһы артында ултырған һәм быйыл мәктәпте** яҡшы белгес булып өлгөрөп етеү осоро етеүгә, ул һайлаған һөнәр ҙә актуаль булыуы икеләтә яҡшы. Бөгөн кибернетика, биотехнологиялар, яңыса ауыл хужалығы һөнәрҙәре актуаль. Йәштәрҙе һәр ваҡыт белемде арттырырға, замандың иң алдынғы яңылыҡтары менән танышып барырға саҡырам.

**Бик урынлы кәңәштәр әйттегеҙ. Ә һеҙ үҙегеҙ әле нимәләр тураһында уҡыйһығыҙ, белемегеҙҙе нисек камиллаштыраһығыҙ?**

- Курстарға йөрөйөм. Китап уҡыуҙы мотлаҡ һанайым. Айына 1-2 китап уҡырға тырышам. Был бик күп түгел, минән дә күберәк уҡыған кешеләр бар. Шәп китаптар бик күп, уҡыу мөмкинлектәре лә етерлек, тик күптәр ваҡыт юҡлыҡҡа һылтана. Мин командировкаларҙа, кискеһен йоҡлар алдынан уҡырға тырышам. Миңә бихисап китаптар белгес. Быны барыһы ла беләһәм мин барыһына ла ышанам. Эйе, улар ҡайһы саҡта яңылышырға ла мөмкин. Беҙ ул хаталарҙы төҙәтергә тырышабыҙ, ыңғай баһалайбыҙ, конструктив әңгәмәгә нигеҙ итеп алабыҙ. Быны күреп, хеҙмәткәрҙәр яҡшыраҡ эшләй башлай. Ҡайһы бер хеҙмәткәрҙәрем: "Беҙ нимәнелер юғалтыуға ҡарағанда, һинең ышанысыңды юғалтыуҙан ҡурҡабыҙ", - тиҙәр. Һәр етәксенең үҙ алымы, минеке - ышаныс һәм демократик ҡараштар.

**Әңгәмәнең рубрикаһы "Заман башҡорто" тип аталыуын иҫәпкә алып, һеҙҙән: "Замандың уңышлы башҡортона хас иң мөһим сифаттар ниндәй ул?"- тип тә һорағы килә бит әле. Беҙҙең милләттәштәрҙә нимә оҡшай, ә нимә - оҡшамай?**

- Йыйнап ҡына әйткәндә, беҙҙең халыҡҡа ниндәйҙер яу дарҙың юҡҡа сығасағы тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Ҡала кешеһе ауылда етештерелгән ризыҡ ашай бит. Тимәк, ауылды йәшәтеү хәстәрлеген ҡала кешеләре лә үҙ иңенә алырға тейеш.

**Ниндәй башҡорт йола-традицияларын яратаһығыҙ, һағынып ҡайтаһығыҙ?**

- Туйҙарҙы, һабантуй, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамдарын яратам. Туғандар менән күрешеүҙән күңелемә бөтмәҫ ләззәт, ял алам.

**Киләсәктә тыуған яҡтарға күсергә пландарығыҙ бармы?**

- Пландар, әлбиттә, бар. Ошо планды күҙҙә тотоп та Өфөләге йортобоҙҙо һатмай торҙоҡ. Тик бер-ике йыл эсендә генә ҡайтасаҡбыҙ, тип тә әйтә алмайым. Аҙмы-күпме "һыу ағыр" әле. Беҙҙең ҡайтыу-ҡайтмау мәсьәләһенең нисек хәл ителеренә йоғонто яһарлыҡ тағы бер фактор бар.

Кадрҙарҙы йәлеп итеү йәһәтенән ут күршебеҙ Татарстанда бик яҡшы эштәр эшләнә икәнен беләм. Ҡаҙан ҡалаһы хакимиәте башлығы Илсур Метшин йылына бер тапҡыр ҡасандыр Ҡаҙанда йәшәп, эшләп киткән белгестәрҙе, Татарстанда тыуған һәм ситтә уҡыған перспективалы төрлө һөнәр эйәләрен үҙ янына әңгәмәгә саҡыра һәм: "Ҡаҙанды үҫтереү өсөн һеҙ ниндәй яҡшы идеялар тәҡдим итәһегеҙ?" - тигән һорау биреп, һәр ҡунағын тыңлай. Әйтәйек, Италияның баш ҡалаһы Миландан килгән архитектор Тимур Ҡадиров ошондай әңгәмәнән һуң Ҡаҙан ҡалаһының баш архитекторы урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнде. Беҙҙең дә бынамын тигән идарасы йәштәребеҙ күп. Уларҙың күптәре төрлө эре-эре ҡалалар буйлап һибелгән. Уларҙы ҡайтарырға һәм республика ойошмалары эшенең һөҙөмтәлелеген арттырырға булыр ине.

# БЕР ВӘКИЛЕНӘ ҠАРАП,

## тураһында фекер йөрөтәләр...

**тамамларға торған уҡыусыларға һөнәр һайлағанда нимәгә айырыуса ҙур иғтибар бирергә кәңәш итерһегеҙ?**

- Өфө дәүләт авиация техник университетына уҡырға ингән сағымда күп кенә дуҫтарым миңә: "Һин нимә ул уҡыу йортона барҙың, унда уҡыу ауыр ҙа инде", - тинеләр. Мин: "Эйе, ауыр. Шулай ҙа минең ошо һөнәргә эйә булғым, уны өйрәнгем, аңлағым килә", - тип яуаплай килдем. Йәштәрҙе шуға саҡырғым килә: хәҙер мөмкинлектәр шаҡтай күп, шуға, Башҡортостандағы "ауыр" вуздарға ғына түгел, ә Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларындағы, сит илдәрҙәге уҡыу йорттарына ла уҡырға инеүҙән ҡурҡмаһындар. Интернеттан өҫтәмә белем дә алһындар, тәү ҡарашҡа бик ауыр күренгән һөнәрҙәрҙе үҙләштерһендәр. Ауыр һөнәрҙәр, ғәҙәттә, ныҡ ҡыҙыҡлы һәм перспективалы була. Ниңәлер хәҙер күп кенә йәштәр: "Әлегә еңел уҡыла торған ергә барып торам да, аҙаҡ ни булһа ла булыр", - тиҙәр. Тормош, ысынбарлыҡ улай уҡ ябай түгел шул. Ни тиклем яҡшыраҡ һөнәр алып, белемеңде үҫтереп, артабан уны үҙаллы белем алыу менән нығытаһың, шул тиклем баһаңды арттыраһың. Һөнәр һайлағанда кәмендә ун йыл алға ҡарап, ун йылдан ниндәй һөнәр актуаль буласаҡ, шуны иҫәпкә алырға кәңәш итәләр. Был хаҡта аналитиктар кәңәштәре йыш баҫыла. Ни өсөн шулаймы? Сөнки бөгөнгө сығарылыш уҡыусылары юғары уҡыу йортон тамамлағансы, 5 йыл үтә, тәүҙәрәк эшләй башлап, тәжрибә туплағансы, тағы бер нисә йыл үтеп китә. Һәм уның яҙҙырылған электрон китабым ныҡ ярҙам итә. Миңә кешенең ҡарарҙар ҡабул итеү үҙенсәлеге тураһындағы китаптар оҡшай. "Ни өсөн кеше тап ошондай ҡарарға килә?", "Кешенең мейеһе нисек эшләй?", "Нисек итеп мейене арытмаҫҡа йәки, киреһенсә, мөмкин тиклем һөҙөмтәлерәк файҙаланырға?" тигән һорауҙарға яуаптар эҙләйем. Иң мөһиме - системалы уҡыу. Көнөнә 30 минут уҡыһаң, айына бер китапты "ыһ" та итмәй уҡып бөтөрөргә була. Кешенең ваҡыты ныҡ күп ул, тик беҙ үҙ ваҡытыбыҙҙы буш нәмәләргә сарыф итәбеҙ.

**Етәксе булараҡ, һеҙ ниндәй принциптарға таянаһығыҙ?**

- Кем ул етәксе? Етәксе тураһында әйтелгән бик аҡыллы һүҙ билдәле: "Етәксе - ул хеҙмәткәрҙәренә яҡшы эш шарттарын ойоштороусы кеше". Мин ошо аҡылдан тайпылмаҫҡа тырышам. Был нимәлә сағылыш табамы? Тәү сиратта, кешеләргә ышаныста. Һин уларға ышанһаң, хеҙмәткәрҙәрең һинең ышанысыңды аҡларға, уға тап төшөрмәҫкә тырыша. Икенсенән, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итеү, хаталаныу мөмкинлеге бирергә кәрәк. Әгәр кеше яңылышыуынан һуң яза аласаҡ тигән ҡурҡыу менән эшләһә, ул яңы аҙымдар эшләп ҡарарға ла ҡурҡасаҡ һәм бөтөн яуаплылыҡты һиңә генә япһарасаҡ. Ул һинең ризалығыңдан тыш бер аҙым да эшләмәйәсәк. Тимәк, хеҙмәткәрең тулы ҡанлы хеҙмәткәр булмай сыға.

Минең принцибым шундай: беҙҙең командала һәр кем үҙаллы. Һәр кем үҙ өлкәһендә аплы аҙым эшләр алдынан була торған тәүәккәллек етеңкерәмәйҙер, бәлки. Был - бер. Икенсенән, бер-беребеҙгә терәк булыу етмәй. Кеше шатлығына - шатланыу, кеше бәләһенә ҡайғырыу етмәй. Беҙҙең бик матур ыңғай сифаттарыбыҙ - киң күңеллелегебеҙ һәм ихласлығыбыҙ бар. Беҙ бер ни өмөт итмәй ҙә ярҙамға ташланырға әүәҫбеҙ. Ысынлап та, үҙебеҙҙең асылыбыҙҙағы, тәбиғәтебеҙҙәге тәүәккәллек, ярҙамсыллыҡ һымаҡ сифаттарыбыҙҙы үҫтергәндә, был беҙгә республика кимәлендә генә түгел, ил һәм донъя кимәлендә лә үҙ урыныбыҙҙы биләргә ярҙам итер ине. Эшләргә, иң тәүҙә үҙеңдән башларға кәрәк. "Әйҙә әле, һин кешеләргә ярҙам ит", - тип кемгәлер аҡыл өйрәтеп, үҙең ҡыл да ҡыбырлатмайһың икән, был, әлбиттә, дөрөҫ түгел. Иң һөҙөмтәле дәлил - һинең эшең. Үҙебеҙҙән башлайыҡ, тип әйтмәксемен. Шул саҡта ҡалғандар ҙа беҙгә эйәрер.

**Ауылдан күптән айырылһағыҙ ҙа, ауыл тормошо яҡындыр. Заман кешеһе күҙләгенән ҡарап, уны терелтеү юлдары тураһында ни әйтерһегеҙ?**

- Ауылдар эреләтеү процесынан ситтә тороп ҡала алмаҫтыр, тип уйлайым. Дәүләт сәйәсәте шулай булғас, быны танымау мөмкин түгел. Ауылды тергеҙеү өсөн ауыл халҡын сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу зарур, фермер хужалыҡтары, кооперативтар һәм замандса фекерләгән лидерҙар кәрәктер, тип уйланыла. Башҡортостан климатын иҫәпкә алып, төп иғтибарҙы ер эшкәртеүгә түгел, ә малсылыҡ (атап әйткәндә, йылҡысылыҡты) тармағын, ҡортсолоҡто үҫтереүгә йүнәлтеү яҡшыраҡтыр, тигән фекергә лә ҡушылам. Ә ауылУл фактор: "Кем сүрәтендә ҡайтырға, кем булып эш башларға?" - тип атала. Эш шунда: ҙур, ҡыҙыҡлы мәсьәләләрҙе сисеп өйрәнелде, хәҙер инде киләһе эш урынымда бәләкәйерәк мәсьәләләргә кире ҡайтҡы килмәй. Төрлө урындарҙа эшләп ҡарап, идара өлкәһендә лә ярайһы уҡ тәжрибә тупланылды, бәлки, ниндәйҙер дәүләт идараһы өлкәһендә үҙемде һынап ҡарау маҡсатҡа ярашлы булыр. Рәсәйҙәге ваҡлап һатыу итеү өлкәһен ярайһы уҡ яҡшы беләм, тигәндәй... Ситтән барыбер күреп йөрөлә бит - идарала барыһы ла ал да гөл түгел, ҡайһы бер кәмселектәр бөтөнләй күңелде ҡыра. Әйтәйек, ни өсөн беҙҙең шифаханаларҙа ял итеү Төркиә отелдәрендә ял итеүҙән дә ҡыйбатыраҡ килеп сыға? Ни өсөн шифаханалар, нәшриәттәр, бал һатыу предприятиелары һөҙөмтәһеҙ эшләй? Был өлкә дәүләт ҡурсыуында түгелме ни? Минеңсә, тейешенсә тырышлыҡ һалғанда, хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеп булыр ине, тип уйлайым. Әйткәндәй, беҙҙең тыуған яҡҡа ҡайтыуыбыҙҙың тағы бер юлы бар. Ул да булһа, үҙ эшеңде асып, Башҡортостан тауарҙарын Рәсәй кимәленә сығарыу. Башҡорт балын, ҡаҙыһын, ҡоротон, ҡаҡланған ҡаҙ итен, ҡыҙыл эремсеген һәм башҡаһын Рәсәйҙең төрлө төбәктәренә таратыу идеяһын тормошҡа ашырыу буйынса эш башларға була. Беҙ үҙебеҙ башҡорт балын реализациялау буйынса тәүге аҙымдарыбыҙҙы яһайбыҙ. Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан заказдар ала башланыҡ та инде. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, был өлкәлә барыбер әллә ниндәй ҙур табышҡа өмөт итергә кәрәкмәй - күңел өсөн эшләнгән эш булыр ул, моғайын, беҙҙең өсөн.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы йылдарҙа йәштәребеҙ күпләп ситкә - Мәскәүгә, Санкт-Петербург, башҡа ҡалаларға уҡырға китә, уҡыған ҡалаһында эшкә тороп ҡала. Әлбиттә, йәштәрҙең төплөрәк белем артынан ситкә китеүен туҡтатырға тырышыу хилаф булыр ине, ә бына уларҙың кәрәкле булгес булып, Башҡортостаныбыҙға әйләнеп ҡайтыуы буйынса мотлаҡ эшләргә кәрәк. Әлеге көндә Төньяҡ баш ҡалала - Санкт-Петербургта эшләп йөрөүсе егетебеҙ Шамил Моталов беҙҙең гәзиткә биргән интервьюһында бик дөрөҫ әйтте: "Ситкә китеүҙә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем, иң мөһиме - кире ҡайтыу һәм Башҡортостанға хеҙмәт итеү өсөн стимул булһын. Ундай стимул юҡ, бер нәмә лә тартып тормай, уҡыған ереңдә ныҡлы урынлашҡанһың һәм бында ҡайтып, яуланған ҡаҙаныштарыңдан түбәнерәк һөҙөмтә алаһың икән - был ысынлап та, проблема. Әгәр кире ҡайтыу һәм республиканы күтәреү стимулы бар - һине көтәләр, һине ҡабул итергә әҙерҙәр, һиңә әлеге ваҡытта яулаған уңыштарың кимәлендә эш тәҡдим итәләр, шарттар насар түгел икән - йәштәр шул ваҡытта кире ҡайтасаҡ..." Бына был йәштәрҙең ситтә уҡыуын, ситтә эшләүен ғәйепләргә маташыусыларға төплө яуап. Һәм тағы: ә шулай ҙа тыуған республикаға ҡайтыу оҙаҡҡа һуҙыла икән, йәштәребеҙ, Бикҡужиндар һымаҡ, башҡорт ғаиләһе ҡороп, башҡорт балалары үҫтереп, милләтебеҙҙе ситтәгеләргә матур яҡтан таныта йөрөүҙе үҙмаҡсат итеп алһын. Ошондай һығымтаға килтерҙе Рәмил Бикҡужин менән әңгәмәбеҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Юлда туҡтатып, машинанан төшөп, ҡарағай олонона битен терәп еҫкәп торҙо. Белмәгәнмен, ул үҙе шундағы бер ҡарағай булған икән. Бөгөлмәй, һығылмай, әммә шартлап һына йәки дөрләп янып китә торған.***




Мин унның муйынындағы ҡайышынан эләктерергә, тағылып торорға маташам. Эт ләүкелдәп өрә, тимәк, хужаһына тауыш бирә. Мине тартҡылай ҙа, ҡырға сабып китә, тағы өрә, тағы килеп, мине ҡолатып, яларға керешә. Башлығымды эҙләп алып, эт туралап сапҡан яҡҡа йүгерәм мин дә. Арыуыҡ сабышҡас, егелгән атҡа килеп төртөләбеҙ. Атайым башын да бороп ҡарамай, санала ултыра. Мин ах-ух килеп унның эргәһенә ҡолайым:

- Ҡа-ҡайҙан белдең минең килгәнде?!

- Белмәй әллә! Бүре үҙ көсөгөн әллә нисә саҡрымдан һиҙә, - күңеле көр, ҡыҙмасалап алған. Ошондай сағында шулай аңлайышһыҙыраҡ, кинәйәләп һөйләнгән була. Мин терәлеү менән ул сыбыҡҡыһын сыжлата:

- Д-дыу! Үжә-әт!

Саҡ тапанып торған, хужаһы кеүек үк яндырай мал торған урынынан үрәпсеп дөрөп сығып китә. Эте һуҙылып сабып эйәреп ҡарай ҙа, хәле етмәй, үпкәсел өрә-өрә ҡала. Бороло штарҙа биткә көрт һирпелә, сана кәйелеп-кәйелеп китә, мин, атайымдың ҡыҙы, быларға ҡушылып шашам:

- Ҡыу тағы! Ҡыу!

- Д-ды-ыу!

Төнгө ауылға ап-аҡ бәҫкә төрөнөп, быу бөркөтөп, дуғалы туй шикелле килеп инәбеҙ.

Хәтәр ҡыҙғансыҡ та ине... Үҙе тирәһендәге бөтә ҡатын-ҡыҙҙы ла ҡыҙғанды. Әсәйемдең берәйһенә күҙ күтәреп ҡарағанын да яратманы, һеңлеләрен, еңгәләрен, килендәрен башҡаларҙан ҡамалап ыҙалатты. Мәжлес-фәләндә берәй ир кеше унның туғанына яңылыш ҡына һүҙ ҡатһынмы, йылмайһынмы - бөттө. Яғаһынан бөрөп алыр йә, унан да яманырағы, ҡундырыр ине. Өҫтәл ауҙарып һуғышып китеү уға бер ни торманы. Шуға, туйҙа-маҙар унның артында йә ҡустыларының, йә ағайҙарымдың береһе һаҡта торҙо.

...Үҫмерлектән сығып, ҡыҙ булып еткән сағым. Егет-елән иғтибарын тоя, күҙ атҡандарын самалай башлағанмын. Урам эсендә ҡомалаҡ таҙалап ултырам. Атайым алып ҡайтып ауҙарған. Мин шуның менән булам, ул алыҫ түгел лапаҫ аҫтында балта һабы юна. Үҙе ҡомалаҡ алып йөрөгәндә ағаста торған уҫлаптай туҙбаш йылан күреүен һөйләй. Уны тыңлайым, үҙем ҡапҡа аша урам яҡтағы бағанала торған егетте лә шәйләйем. Атайымдың хәбәренән бигерәк, ике күҙе был яҡта булған шул әҙәмдең ҡарашынан иреп йылмаям. Ауылда электр бағаналарын алмаштыралар, был шуларҙың береһе булырға тейеш, бағана башында нимәлер эшләп маташа, йыш-йыш был яҡҡа күҙ һала. Шул ваҡыт Хоҙай ҡушмаған хәл булды. Атайым тыныс ҡына тороп, аҙбарҙан "Дружба" бысҡыһы алды, шунан ҡабаланмай ғына урам тышына сығып, ҡапыл сыжлатып теге егет торған бағананы быса башланы. Бахыр электрик нисек төшөп ҡасҡанын иҫләмәгәндер. Аҙаҡ бысҡыһын кире индереп ҡуйып, баяғы урынына терәлеп, юныуын дауам итте. Мин дә ни булғанын аңламамышҡа һалыштым. Башҡа сарам юҡ ине.

...Бынау бер фотола айыу алған сағы икән. Тау һымаҡ булып ятҡан айыуҙың өҫтөндә ваҡ ҡына балалар теҙелешеп ултырабыҙ. Ҡурҡыу юҡ, өркөү юҡ. Һунарсы булды бит атайым. Ғүмер буйы ҡушкөбәк тотто. Шундай ҡыҙыу һәм йыш ҡына һуҡмыш йөрөгән кешенең мылтыҡлы булыуы минең бөгөнгө күҙлектән, эйе, маймылдың граната тотоп йөрөүенә тиң. Ул-был хәлдә мылтығын һөйрәп сығарып, аҙ яһау һалманы инде.

...Аласыҡта киске һауын һөтөн үткәреп ултырам. Атайым менән әсәйем сәй артында һүҙ көрәштерә. Сепарат тауышынан тегеләрҙе яҡшылап ишетмәйем. Шулай ҙа бәхәстәре мал араһындағы дәү ҡара үгеҙ темаһына икәнлеген төшөнәм. Шулай сыйыша торғас, атайым ҡапыл һикереп тороп өйгә йомолдо. Унан күп тә тормай, мылтыҡ тотоп сыға ла, әсәйем "Ах" иткәнсе, бейек болдор тәҙрәһенән тороп, бер ҙә төҙәмәйенсә атып ебәрә, бер ни һиҙмәй торған ҡара үгеҙ, маңлайына пуля тейеүҙән лып итеп арт һынына ултыра төшә. Тауышҡа йүгерешеп сыҡҡан ағайҙарымдың береһе бысаҡ алып, бахыр малды салып та ебәрә. Төн буйына ит айырабыҙ, эсәк йыуабыҙ, телен тыймаған әсәйҙе әрләйбеҙ.

* * *

Унның кеүек ирек һөйгән бүтән кешене белмәйем. Бер ниндәй сикләүҙе, баҫымды, ҡыҫымды күтәрә алманы. Кемгәлер ниндәйҙер һүҙ әйтеүҙән ҡурҡманы. Ғөмүмән, ул ҡурҡа белмәне. Унның өсөн түрә лә, хужа ла, Алла ла, мулла ла булманы. Тәбиғәткә бәйләнеүе шул ҡәҙәр ине, үҙен унан айырым күҙ алдына килтерә лә алманы. Ундай-былдай хәлдә:

- Кейек булып урманда ла йәшәй алам мин, - тип эре сирттереп тә ебәрҙе. Шуғалырмы, ҡырға сығып һыбай йөрөй алмай башлауын ауыр кисерҙе. Был хәл уны рухи яҡтан ныҡ ҡырҡты. Тәҙрәнән ҡарап-ҡарап ултыра ла:

- Урманға һыуһап ултыр инде урман эсендә, - тип әсенеп әйткеләр ине.

Яңғыҙ ҡалғас, уны ҡалаға алдыҡ. Кесе улының бишенсе ҡаттағы фатирына алып килеп ултырттыҡ. Был унның өсөн шок булды. Бер аҙна ултырғас, мин бер төшкө аш ашатып китергә килһәм, былай ти:

- Ирәндектең ҡайһы тәңгәленәнерәк Уралға сығыу юлын самаланым әле. Ҡуңырбуға юлынан төшһәм, һыртлап, элекке үҙебеҙ мал ҡыуған тәңгәлдәргә барып төшөргә тейешмен.

Әкиәт һөйләгән балаға ҡараған кеүек ҡарайым:

- Ярай, ҡайтып етһәң, сәләм әйтерһең. Тамағыңды туйҙыр тәүҙә.

Тик ул аштан ҡалған, бындағылар әйтеүенсә йоҡонан да. Ике күҙе офоҡта күгәреп күренгән тауҙарҙа. Торараҡ әйтеп һала:

- Салауат Юлаев ошолайтып зарыҡты микән? Бахыр...

- Ҡайҙа? - көлөүемде саҡ тыям.

- Зинданда.

- Уф, атай, һин сәпсим килештерәһең. Салауат Юлаев һинең һымаҡ араҡы шимләп ултырмаған. Ана, күпме шешәң йыйылған.

- Аҙлап ҡына... Бында шунһыҙ түҙеп ҡара.

Артыҡ сәбәләнмәгәс, ярһымағас, был зарын ысынға алмаһаҡ - күрһәтте.

Таң менән килен шылтырата:

- Апай, ҡайным тәҙрәнән ҡолап төшкән! Скорый әпкитте! - ҡысҡыра теге трубкаға истерика сигенә етеп.

- Туҡта. Тыныслан! Ниңә улай?

- Әллә!..

Күҙемә аҡ-ҡара күренмәй сабып барып инһәм, атайым бер ни булмаған кеүек балнис карауатында ултыра, ҡулы гипслы. Янында - врач, милиция, ул тыныс ҡына аңлата:

- Ҡайтайым тигәйнем бөгөн. Ишеккә барһам, баллар бикләп киткән. Мине! Бикләп киткәндәр, бала һымаҡ итеп! Мин әйтәм: "Йо-оҡ! Һеҙ мине былайтып тоталмаһһығыҙ!" Тәҙрә ситендәге торбаны самалап алдым да, буйлап төштөм дә киттем. Ергә етәрәк кенә ысҡынып кителде, шулай булмағанда ҡауғаһыҙ-ниһеҙ ҡайтып та китәр инем әле.

Милицияның теле көрмәлә:

- Б-бабай, һеҙ һикһәнгә етеп барған кеше, н-нимә уйлайһығыҙ? Бишенсе ҡаттан?!

- Ҡайтам, тип әйттем бит, мин уларға көн дә әйтәм шуны, берәүһе ишетмәй.

Ишеттек, ниһайәт. Тиҙ генә кире ауылына күсерҙек. Юлда туҡтатып, машинанан төшөп, ҡарағай олонона битен терәп еҫкәп торҙо. Белмәгәнмен, ул үҙе шундағы бер ҡарағай булған икән. Бөгөлмәй, һығылмай, әммә шартлап һына йәки дөрләп янып китә торған.

* * *

Минең никахтан да фотолар бар. Шунда, эй, атайым йәл булғайны, нишләптер. "Кейәүгә сығам" тип ҡайтып төшкәс, бер һүҙ ҙә өндәшә алманы. Шым ғына йөрөп һарыҡ һуйҙы, эргәһендә булышҡан миңә күтәрелеп тә ҡарамай. Ҡоҙалар менән дә аралашманы, муллаға "Риза" тип әйткәнен генә ишеттем, башҡа ләммим тауышы сыҡманы. Эсеп боларып ҡуймаһын тип ҡурҡһаҡ, ҡайҙан, ауыҙына ла алмай, хатта ашҡа ла артыҡ ҡағылмай ултырҙы. Унның шулай юғалып ҡалғанын күреп, бала һымаҡ күреп йәлләнем. Тик, бер-беребеҙгә йылы һүҙ ҡатып, иркә өндәшеп, һөйөшөп өйрәнмәгәс, ҡырҙан ғына ҡыҙғанып ҡарауҙан үтмәнем.

Кейәүем яғында булып килгәс, әсәйем ошаҡлаша:

- Атайың ҡоҙалар биргән бүләктәрҙе вис йыртып ташлап бөттө.

- Нишәп?..

- Һора үҙенән "нишәп" тип.

Ишетмәмешкә һалышып ултырған атайыма боролам:

- Нишәп?!

Ул өндәшмәй. Ҡолағына балауыҙ ҡойолған шикелле, беҙ бөтөнләй юҡ һымаҡ, туҡылдап йәҙрә әүәләүен дауам итә.

- Нишәп улайттың, атай?!

Яуап юҡ.

...Ирҙән айырылғанымды ишеткәс, яратманы. Ҡатындың ирен ташлап китеүе унның башына һыймаған һымаҡ. Мине өйгә индермәҫкә ҡушҡан. Тик инде йортта ҡустым хужа, унның ҡарарҙары хәҙер бында закон түгел. Был талабынан көләләр генә. Ҡайттым. Уға бүләгемде һалам. Ҡағылмай, алдына ғорур ҡарап ултыра бирә. Көләм. Асыуланып китә:

- Ҡыуанып ултырыр көнөң бармы?

- Атай, мин хәҙер үҙем оло кеше, үҙем хәл итәм, - тим.

- Ҡалай аҡылың күбәйгән икән, ир ташларға, донъя ташларға башың еткән, - мыҫҡыл итеп ауыҙын ҡыйшайта. Шулай теле зәһәр унның кәрәкмәгәндә.

Ҡустым яҡлаша:

- Атай, етәр, апайым беҙгә ҡунаҡҡа килгән. Бер ни аңламаған ниндәй кеше ул һин?

- Кеше түгел, мин - мышы! Һеҙҙеңсә аңламайым!

Күҙ ситтәре менән генә ҡарашып, эргәһенән шылабыҙ. Берике көн бурылдап йөрөп яҙылып китә. Өҫтөн алмаштырып, тамағына ташып, эргәһендә бөтөрөлөп йөрөүемде күҙәтеп ултыра ла:

- Тәтәй һамаҡ ҡатынһың. Нимә оҡшаманы икән ул эткә? Килеп ҡулыма ҡапһа, һарыҡ һуйған бағанаға бәйләп ярам мин уны, - тип бармағын күтәреп янап-янап ала. Кемделер ҡайыҙларлыҡ көсө булмағанда эш юҡ. Дыуамаллыҡ үҙенекен итә, кәр киткән, әммә холоҡ ҡалған.

- Шулайтырһың, ярай, - тип йөпләп кенә торам.

Оҙата сығып, машина көтөп эскәмйәлә ултырғанда, баш ҡаға-ҡаға әйтеп ҡуйҙы был:

- Ул егеттең һине тота алмаҫын шул беренсе килеп торғанында уҡ һиҙҙем мин. Ҡарашы бигерәк йоҡа ине. Минең ҡыҙға был хужа була алмай, тип уйланым. Шулай сыҡты ла...

Һуңғы күрешеүебеҙ, һуңғы һүҙҙәре шул булған икән...

Китсе, атайым тураһында бер ыңғай ғына иҫтәлегем юҡ әллә?! Гел әллә нимәләрҙе хәтерләп тик ултырам. Ҡарап тороуға үтә лә тыныс, моңһоҙ кеүек тә, мәле еткәндә дауылдай күтәрелеп, уйламаҫ нәмәләр яһар, көтөлмәгән хәлдәр ҡылыр яндырай атайымдың арҡамдан һөйөп йүнле хәбәр әйткәне лә булмағанмы? Булмағандыр. Әммә минең күңелемдә уға ҡарата яралған тойғоларҙы алмаштырыр ир кеше лә юҡ икән. Уға ышанған кеүек, берәүгә лә ышана, арҡалана, уға һоҡланған кеүек берәүгә лә һоҡлана, ҡылыҡтарына аптырай алмағанмын. Унан ҡурҡҡан кеүек берәүҙән дә ҡурҡмағанмын йәки буйһонмағанмын. Сөнки унның кеүек өҙә һуғыр, ҡарашы менән теҙ сүктерер әҙәм булмаған, осрамаған. Унның кеүек берәү ҙә минең өсөн йылғаға ташланмаған, ҡарлуғас ояһынан йомортҡа төшөрмәгән, көнләшеп, бысаҡҡа йәбешмәгән, һунарҙа эйәреп йөрөп туңғанда ҡарҙа усаҡ яғып, аяҡ-ҡулдарымды ыуып йылытмаған, боҙло һыуҙа мине ат өҫтөнә ултыртып, үҙе алдан төшөп, билдән кисеп сыҡмаған. Йәнен һурып бирер, үҙен ҡорбан итер, аптыратыр, шаңҡытыр ҡылыҡтар ҡылмаған. Унан башҡа берәү ҙә...

Ошо асышты яһағас, атайымдың үлемен ишеткән мәлдә барлыҡҡа килгән эсемдәге, төптәге һаңғырау ауыртыуҙың ни хәтлем тәрән яранан килеүен, йәнемдә ни ҡәҙәр әсе һыҙланыу барлығын тойҙом. Минең бит холоҡһоҙ, эскесе, дыуамал ҡартым, ғәзиз атайым юҡ. Ул - гүрҙә. Ниһайәт, һығылып илап ебәрә алдым:

- Атаҡай... Атаҡайым!..

**(Аҙағы. Башы 7-се һанда).**

ИЖАДХАНА

# ҠУРАЙ ҠУРАЙСЫНЫ ҮҪТЕРӘМЕ,

## әллә ҡурайсы ҡурайҙымы?

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсыһы, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты Илнур ХӘЙРУЛЛИН үҙенсәлекле башҡарыу алымдары менән күптәрҙән айырылып тора. Башҡорт халыҡ йырҙары менән көйҙәренән тыш, ул ҡурайҙа композитор әҫәрҙәрен дә башҡара. Уның менән әңгәмәбеҙ башҡорт халҡының иң бөйөк уйын ҡоралы ҡурайға бағышланды.**



### Кеше ғүмер буйы белем ала

Тыуған ерем - Ишембай районы Этҡол ауылы. Беҙҙең яҡта ҡурайсылар күп түгел, ауылыбыҙ йырсылары менән дан тота. Мәктәптә уҡыған саҡта беренсе уҡытыусыларым Нурия Әбүбәкирова, баянсы Фәнит Усманов өйрәткән "Уралым", "Кара тауыҡ", "Айҙар ғынайым" йырҙары менән конкурстарҙа ҡатнашып, мин дә гел беренсе урындар ала торғайным. Атай ҙа гармунда уйнай, әсәйем йырлай. Күрше ауылда Наргис Ҡолмәмбәтов тигән ағайҙың ҡурайҙа уйнағанын күреп, ошо инструментта өйрәнергә теләк уянды. Өйҙә Ришат Рәхимовтың "Ҡурай" китабы бар ине, шунан өйрәнеп, тәҙрә гардинының тимер көпшәһенән ҡурай яһап алған булдым. Уның тишектәрен тотомлап үлсәп киҫтем һәм шул ҡурайҙа тауыш сығарырға өйрәндем. Моң менән кешегә тәьҫир итеп була икәнен концерттарҙа йырлап йөрөгәндә һиҙгәйнем инде. Минең ҡурай менән ҡыҙыҡһынып китеүемде күреп, ауылда табип булып эшләгән Хәйҙәр ағай ҡурай бүләк итте. Мәктәпте тамамлағас, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға килдем. Нота өйрәнергә ике аҙна ваҡыт бирҙеләр ҙә, мине шунда уҡ икенсе курсҡа уҡырға алдылар.

Ғөмүмән, күп ҡурайсылар уйнарға үҙ аллы өйрәнә ул. Мин дә үҙемсә төрлө тауыштар сығарып, эксперименттар яһай инем. Училищела килгәндә, "Буранбай"ҙы, "Урал"ды башҡара инем инде. Башҡортостандың халыҡ артисы Ришат Рәхимовта уҡыным. Институтта ла башта Ришат Рәшит улында, һуңынан Венер Йылҡыбаевта белем алдым. Хәҙер филармонияла Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Миңлеғәле улы Айытҡолов менән эшләүемә, унан һаман да һабаҡтар алыуыма ҡыуанам.

### Көйҙө эстән кисерергә кәрәк

Бөгөн төрлө конкурстарҙа ҡатнашҡанда шул етешһеҙлек күҙгә ташлана: йырсылар ҙа, ҡурайсылар ҙа йырҙы аңлап етмәй, бер көйгә һалып йырлай йә уйнай. Һәр бер халыҡ көйөнөң үҙенең характеры, уны бирә торған эмоциональ биҙәлеше бар. Мәҫәлән, "Һыр" йырын лирик көй итеп уйнайҙар, бына һин тәбиғәт ҡосағында йөрөп ятаһың, шишмә сылтырып ағып ята, ҡоштар һайрай, барыһы ла матур. Ә ул - трагедия. Ғөмүмән, башҡорт көйҙәренең күбеһе тотош милләт өсөн трагедия булған ваҡиғалар, фажиғәле яҙмыштар тураһында. Көйҙөң үҙ үҫеше, иң юғары эмоциональ нөктәһенә төрлө биҙәлеш биреп була. Көйҙө тышынан түгел, эсенән уйнарға, эстән кисерергә кәрәк.

Шулай уҡ боронғоса уйнау алымы юғала, тип дөрөҫ әйтәләр. Ажғырып, гөрләтеп уйнаған ҡурайсылар бөгөн бер тиҫтәгә лә тулмайҙыр. Ишмулла Дилмөхәмәтовтар, хатта Әҙеһәм Исҡужиндар ҙа икенсе төрлө уйнаған, сөнки уларҙың тауыш ҡуйылышы башҡа булған. Ғата Сөләймәнов Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай класы асҡас, "Ғата ҡурайҙы боҙа", тип йөрөүселәр ҙә табылған. Борон башлыса тамаҡ менән уйнағандар, нота менән уйнау алымдары ингәс, тәбиғи ҡурай икенсе төрлө яңғыраш алған. Йәғни, тауыш сыға, әммә тауыштың тығыҙлығы, тәрәнлеге боҙола. Ҡайһы бер ҡурайсыларҙы тыңлаһаң, уларҙың моңо ҡолаҡҡа ятып ҡына тора, матур. Остаздарыбыҙ - Азат Айытҡолов, Роберт Юлдашев, Рәсүл Ҡарабулатовты миҫал итеп килтерергә булыр ине. Шуға ла бит был һөнәрҙә уҡытыусы мөһим ролде уйнай, ҡурайҙа уйнау серҙәрен асты, тигәндә, "сер" төшөнсәһенә тап ошо тауышты сығарыу, көйҙө урынына еткереп уйнау, телде нисек ҡуйыу үҙенсәлектәре инә лә инде. Уҡыу йөрө бит һинә нигеҙ генә һала, йүнәлеш бирә, ҡалғаны үҙеңдән тора. Шуға ла Ғата Сөләймәновтың, ҡурайсылар ҙа профессиональ белем алһын, дипломдары булһын, киләсәктә эшкә урынлаша алһын, тигән маҡсаттары изге булған, бөгөн беҙ уға рәхмәтлебеҙ. Етешһеҙлектәр өҫтөндә иһә яйлап эшләргә бурыслыбыҙ.

### Ҡурай - берҙән-бер

Былтыр Өфөлә үткән "Төркиҙәр алтыны" йәштәр форумында мин ҡурай буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәттем. Яҡуттар, ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар килгәйне, ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар. Шунда бер татар ҡыҙы: "Ҡурайҙың төрҙәре лә бар ҙа инде..." - тип һүҙ ҡыҫтырҙы. Мөмкинлек булғанда, бөтөн ерҙә лә әйтеп йөрөйөм: ҡурайҙың төрҙәре юҡ, булыуы ихтимал да түгел. Бына курага тигән емеш - ул шул уҡ абрикос. Йәғни, курага - үҙ һутында киптерелгән абрикос. Башҡорттар, үлән кибә, тимәй, үлән ҡураған, ти. Ә "короған" тигән һүҙ бөтөнләй икенсе мәғәнәлә, мәҫәлән, ҡороған ағас һ.б. Ҡурайҙы ла йәшел сағында түгел, үҙ һутында ултырып кипкәс, һуңынан ғына ҡырҡып алаһың. Атамаһы ла шунан - ҡурай. Төрки йәки Иран халыҡтарында күп кенә уйын ҡоралдарының исеме "най" йәки "ней" ялғаулы. Үзбәктәр "камиш най", "карнай", төрәктәр "ней", "зурнай", "керренай", "сорнай" ти.

Милли республикалар айырымланғас, миллилеккә күрһәтел торған үҙенсәлектәргә иғтибар башланды. Шул мәлдә татарҙар ҙа һыбыҙғыларына ҡурай тип исем ҡушты. Һыбыҙғы - ул ирланд флейтаһының күсермәһе. Уның мундштугы бар, унда бала өрһә лә, тауыш сығасаҡ. Уны тимер, пластмасса, ағастан эшләйҙәр, үҫкән ысын ҡурайҙан уны яһап булмай. Тимәк, исеменә есеме тап килмәй, тип әйтергә була. Тарих менән ҡыҙыҡһыныуы һәр ваҡыт үҙ иленең патриоты булған атайымдан күскән. Башҡорт мәҙәниәтенә бәйләкәй саҡтан ғашиҡмын. Белмәгәнемде уҡыйым, белгәнемде һөйләй йөрөйөм, сөнки кешегә ваҡытта донъяла мәғлүмәти алыш бара. Бер милләттең йәҙө төрлө булыуы бар, башҡорттарҙы ла бит бер нисә төргә айырып ҡарарға була. Милли уҙаңды иһә өс нәмә билдәләй: тел, мәҙәниәт, йолалар.

### Көйҙө ҡурай һаҡлаған

Халыҡта музыкаль инструмент булмаһа ла, йырҙар һаҡланып ҡала, сөнки уның һүҙҙәре бар. Йыр үҙенең йөкмәткеһе менән хәтерҙә ҡала. Ә башҡорт халыҡ музыкаль мираҫының 30-40 процентын көйҙәр генә алып тора. Инструменталь көйҙәр, йырҙарҙан айырмалы рәүештә, уйын музыка ҡоралы булмаһа, күптән онотолоп бөткән булыр ине. Улар ҡурайыбыҙ булғанға ғына бөгөнгө көнгә килеп еткән. Әлбиттә, көйҙәрҙең күптәренең атамалары үҙгәргән, сөнки көйгә берәй шиғыр һалынған, йә таҡмаҡ йырланып, артабан таҡмаҡ исеме менән йөрөтөлә башлаған. Ишмулла Дилмөхәмәтов Салауат Юлаевтың һүҙҙәрен "Сыңрау торна" көйөнә һалып уйнаған, бөгөн уны күптәр "Уралым" тип белә. Ә ҡурайҙы үҙҙәренеке итергә тырышыусы милләттәрҙең бындай боронғо көйҙәре юҡ.

Башҡа халыҡтар өсөн ҡурай - ул бер мөғжизә. Ябай көпшәнең эсендә бер нәмә лә юҡ, уның нисек көй сығарыуын аңлай алмайҙар. Киләсәктә ул донъя кимәлендә яңғыраһын ине, сөнки бындай тембрлы музыка ҡоралы башҡа юҡ. Бөгөн төрөктәр най тигән уйын ҡоралдарын реставрацияларға маташа, улар уны ирандарҙан алған. Уйын ҡоралын яһар өсөн Ҡытайҙан бамбук алдыралар. Был дөрөҫ түгел, уйын ҡоралы тыуған ерендә үҫергә тейеш. Әйткәндәй, ирандар найҙа беҙ ҡурайҙа уйнаған кеүек уйнайҙар, тик тауыш шаулап сыға, Төркиәлә найҙы ауыҙға ҡуймайҙар, мундштук формаһында түнәрәк ҡуялар ҙа, флейта уйнағандағы кеүек, ҡырын итеп өрәләр.

### Пропаганда кәрәк

Мине күптәр, бигерәк тә өлкән ҡурайсылар хроматик ҡурайҙа уйнаған өсөн битәрләй. Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры ла ошондай ҡурайҙар менән сығыш яһай. Ҡурайҙа биш тишек, хроматик ҡурайҙа - ете. Мәҫәлән, Монтиҙың "Чардаш"ын иң камил һәм мөмкинлектәре ҙур тип иҫәпләнгән скрипкала ғына башҡаралар. Ә хроматик ҡурайҙа уны ла уйнап була. Тик мин ҡайҙа йөрөһәм дә, үлән ҡурай ҙа алып йөрөйөм һәм был традицион ҡурай, быныһы заманса ҡурай тип әйтәм. Ҡурай - ул изге уйын ҡоралы, уны боҙмағыҙ, тиеүселәр менән дә килешәм, әлбиттә. Тик күптәр ваҡытында Азат Биксурин, Роберт Юлдашев, Рөстәм Шәрипов, Рушан Биктимеров ҡурайҙа заманса көйҙәр башҡарған дискылар сығара башлағас та ҡаршы төшкәйнеләр. Был бит үҙенә күрә пропаганда, йәштәр ошондай ҡурайсыларға ҡарап, ҡурай уйнай башлай.

Бала бит башта ҡурайҙың төп асылын, халыҡ көйҙәрен аңламай. Ул килә лә, яйлап уйнай башлай, техник яҡтан үҫә. Һуңынан ниндәйҙер музыкаль кимәлгә етеп, ошо заманса көйҙәрҙе уйнап бөтһә, яңыларын эҙләй башлай. Кешегә бит гел яңылыҡ, гел үҫеш кәрәк. Ә бөтөн яңылыҡ - ул онотолған иҫке нәмәләр, тиҙәр бит. Шулай итеп, халыҡ көйөнә килеп терәләләр, ҡурайҙың ысын көсө, моңо ҡайҙа икәнен аңлап ҡалалар. Техник яҡтан үҫешмәһәң, халыҡ көйҙәрен урынына еткереп барыбер уйнай алмайһың. Өҙләүҙе лә айырым өйрәнәһең, аҙаҡтан ҡурайға ҡушып өҙләй башлайһың.

Ҡумыҙ ҙа бик ярҙам итә. Мин үҙ мәлендә Роберт ағай Заһретдиновтан дәрестәр алғаным булды. Көй өйрәнгәндә тәүге тапҡыр уны сығанаҡта нисек булған, шулай уйнайһың. Ә икенсе тапҡыр ҡурайсы уны ҡабатламай, үҙенсә сығарырға тейеш. Йәғни, импровизатор булаһың. Ҡумыҙ тап ошоға булышлыҡ итә. Роберт ағай, ҡояш бит ҡапыл килеп сыҡмай, тәүҙә таң ата, ҡоштар һайрай, ҡояш тыуа, ул яйлап өҫкә күтәрелә, күпмелер ваҡыт һауала торғандан һуң байый. Көйҙө уйнаған саҡта ошо ваҡиғаларҙы алдан күҙаллап, алымдарҙы үҙгәртеп өлгөрергә кәрәк, тип әйтә торғайны. Әле лә ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтан күп нәмәгә өйрәнәм. Ә виртуоз ҡурайсы тигән һүҙ композиция һәм техник яҡтан үҫкәнде аңлата. Йәғни, ниндәйҙер ҡыҙыҡлы йүнәлештәр, биҙәүҙәр алдан бағажына һалынып ҡуя ла, һин уны кәрәк саҡта ғына ҡушып ебәрәһең.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илнур Хәйруллин башта уҡ "Нисек уйлайһығыҙ, ҡурай ҡурайсыны үҫтерәме, әллә ҡурайсы ҡурайҙымы?" тип үҙемә һорау биреп аптыратҡайны. Һөйләшеп ултыра торғас, ҡурай менән ҡурайсының баһаһы һәм дәрәжәһе тигеҙ тигән фекергә килдек. Сөнки әңгәмәсем әйтеүенсә, ҡурайҙа уйнауы уны күтәргән, шуның өсөн дә ул бөгөн ҡурайҙы үҫтереү менән мәшғүл. "Бөгөн ҡылыс болғап, яуға сабыу аҡылһыҙлыҡ, шуға ла тыныс юлдар менән халҡыбыҙҙы башҡаларға танытыу кәрәк", - ти ул.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

**✓ Бында республиканың төрлө райондарынан килгән пациенттарға ярҙам күрһәтелә. Былтыр барлығы 14 мең кеше тикшерелгән. Бындай процедураның уртаса хаҡы 12 мең булһа, республика халҡы өсөн ул бушлай.**



ИНТЕРНЕТТАН



# СТРЕСС...
## хәтерҙе насарайта

■ Офиста эшләү, гәҙиттә, әүҙем аҡыл эшмәкәрлеге менән бәйле. Баш мейеһенә даими энергия кәрәк, шуға ла эш ваҡытында нисек туҡланырға кәрәк һуң? Ғалимдар раҫлауынса, бөтөн ризыҡтар ҙа баш мейеһенең эшмәкәрлеген әүҙемләштермәй. Мәҫәлән, сейә кеүек файҙалы емеш-еләктәрҙә мелатонин күп, шуға ла улар йоҡоно килтерә. Ҡәһүә эскәндән һуң 60-90 минут ваҡыт үткәс кенә уның тәьҫирен тойорға була. Офиста банан ашау ҙа кәрәкмәй. Ул шулай уҡ йоҡоно килтерә. Көнбағыш, палтус балығы, тәм-том да шундай уҡ һөҙөмтәгә алып килә. Шулай булғас, эш урынында нимә ашарға һуң? Белгестәр билдәләүенсә, эремсек, йогурт кеүек һөт ризыҡтарына, төрлө бутҡаларға, йәшелсәгә, алмаға, йөҙөмгә, грушаға өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

■ Массачусетс һаулыҡ һаҡлау департаменты ғалимдары билдәләүенсә, сифатлы аҙыҡ-түлек һайлап алыу мөмкинлеге бирмәгән магазиндар һимеҙ кешеләрҙең күбәйеүенә килтерә. Киреһенсә, өйөнөң эргәһендә генә йәшелсә, емеш-еләктәр һатылған кибет булһа, ундайҙар һомғолораҡ була. Тикшеренеүҙәрҙә ябығырға теләүсе 204 кеше ҡатнашҡан. 2,5 йыл буйына уларҙың нисек туҡланыуын, аҙыҡты ҡайҙан һатып алыуын күҙәтеп, ғалимдар ошондай һығымтаға килгән дә инде. Күптәр бөгөн автомобилдәрҙә йөрөй, улар ҙа, йәйәүлеләр ҙә аҙыҡты йорто эргәһендәге магазиндан һатып алыуҙы ҡулайлыраҡ күрә.

■ Лейкемия - ҡан яман шеше ниндәй сәбәптән килеп сығыуына белгестәр әлегәсә яуап биргәндәре юҡ. Әгәр ҙә сиргә диагноз иртә ҡуйылһа, уны дауалап була, был саҡта иҫән ҡалыу осрағы 80 процент тәшкил итә. Ғалимдар лейкемия насар экология менән бәйле булыуы ихтимал, ти. Шулай уҡ яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡәһүә ҡулланыу ҙа был сир менән бәйле булыуы бар. Ауырлы саҡта көнөнә 2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр балаларын лейкемия менән ауырыу хәүефенә дусар итә. Тикшеренеүселәр буласаҡ әсәләргә ҡәһүә эсеүҙән тыйылып торорға кәңәш итә, сөнки кофеин яралғының күҙәнәктәрендә ДНК-ның үҙгәреүенә алып килә, һөҙөмтәлә, улар был сиргә тиҙерәк бирешә.

■ Стресс гормоны кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытта күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Электрон ҡоролмаларҙағы мәғлүмәт хәтерҙә һаҡланмай. Принстон университеты тикшеренеүселәре раҫлауынса, ҡулдан яҙылған мәғлүмәт компьютерҙа баҫылғанына ҡарағанда яҡшыраҡ хәтерҙә ҡала. Был хәтергә ныҡлы процесының иң ҡулайлы юлы. Әгәр ҙә нимәнелер ятларға теләһәгеҙ, ябай ҡағыҙ һәм ручка ҡулланып, уны яҙып ҡуйыу ҙа етә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Бик йыш, ологая бара, кешеләр аяҡтарында, бигерәк тә баш бармаҡтың быуынында, аяҡ кейеме кейеүгә ныҡ ҡамасаулаған оро барлыҡҡа килеүенә зарлана. Уның ниндәй проблемалар тыуҙырыуын ошо торошҡа дусар булған кеше үҙе генә аңлайҙыр, моғайын. Ғәмәлдә ул ниндәй сир һәм нимәнән барлыҡҡа килә? Ошо һорауҙарға асыҡлыҡ индерергә бөгөн табип Марат АҠБУЛӘКОВ ярҙам итә.**



# "АҠҺӨЙӘКТӘР" АУЫРЫУЫ

- Медицина телендә был сир подагра тип атала һәм ул матдәләр алышыныуы боҙолғанда барлыҡҡа килә. "Подагра" термины ике грек һүҙенән "podos" һәм "agra" барлыҡҡа килеп, "табан өсөн ҡапҡан" тигәнде аңлата. Ул төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡанда һейҙек кислотаһы артыуына һәм уның кристалдарының организмдың төрлө туҡымаларында һәм ағзаларында тофустар - подагра төйөндәре барлыҡҡа килтереүенән ғибәрәт. Мәғлүм булыуынса, һейҙек кислотаһы аҡһым алышыныуының һуңғы продукты. Ул бауырҙа аҡһым тарҡалғандан һуң барлыҡҡа килә һәм ҡанда йөрөп, организмдан бөйөрҙәр ярҙамында сығарыла. Бауырҙа артыҡ синтез булғанда йәки бөйөр функциялары боҙолғанда һейҙек кислотаһы ҡанда йыйыла һәм ул ныҡ күп булғанда, кристалланып, төрлө ағзаларға ултыра башлай. Шулай ҙа уларҙың яратҡан урыны - быуындар, ләкин бөйөр, йөрәк, ҡан тамырҙары, эсәктәр һәм хатта күҙҙә лә тупланыуҙары ихтимал.

**➔ Ул ауырыу элек-электән билдәле ме, әллә, хәҙер телмәребеҙгә килеп ингәнсә, "замана сиреме"?**

- Тарих төпкөлөн байҡап, уның ҡайҙан килеп сығышын асыҡларға тырышһаҡ, шундай картина тыуыр: беҙҙең эраға тиклем V быуатта уҡ Боронғо грек табибы Гиппократ подагра артритының клиник симптомдарын яҙа, ә XVII быуатта инглиз табибы Томас Сиденгам уны айырым сир тип билдәләй һәм киҫкен өйәнәген аныҡ һүрәтләп ҡалдыра. А. Гарродтың 1859 йылда үткәргән тәжрибәне бик ҡыҙыҡлы. Тәжрибәлә ул подагра менән сирле кешенең ҡан һыуынә еп төшөрә һәм 1-2 көндән еп һейҙек кислотаһы кристалдары менән ҡаплана.

Гиппократ заманында уҡ был сир менән бай кешеләрҙең ауырыуы билдәләнә һәм шуға ла уны "короләр ауырыуы" йәки "аҡһөйәктәр ауырыуы" тип атайҙар. Быны ябай ғына итеп шулай аңлатырға мөмкин: байҙар күп ашаған, ит һәм алкоголь ҡулланған, ә ярлыларҙың бындай мөмкинлеге булмаған. Хатта Шекспир был турала былай тип яҙған: "Подагра злая, скрючь седых вельмож; пусть, как их честность, и они хромают".

**➔ Сирҙең төп билдәләре ниндәй?**

- Тәүге билдәһе булып быуындарҙың ялҡынһыныуы тора. Иң элек аяҡ баш бармағының быуыны зыянлай, артабан, дөрөҫ дауаланмағанда, барлыҡ быуындар ҙа зарарланыуы мөмкин. Подагра артриты артриттың башҡа төрҙәренән быуындарҙың хәрәкәтсәнлеген сикләгән ауыртыуҙар менән билдәле. Өйәнәк ваҡытында сирлеләр аяҡтарына баҫа, үҙҙәренә урын таба, тыныс йоҡлай алмай. Сир башланып ҡына торғанда бындай өйәнәктәр һирәк була һәм "һөжүм"дән һуң оҙайлы ваҡыт кеше тыныс, ауыртыныуһыҙ йәшәп ала. Әммә был осор сирҙең иң мәкерле ваҡыты, сөнки дауаланмағанда, ҡанда һейҙек кислотаһы кимәле юғары булып ҡала һәм ул артриттың хроник ауырыуға әйләнеүенә, инфаркт һәм инсульт кеүек йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына, хроник бөйөр етешһеҙлегенә һәм шәкәр сиренә килтерә.

**➔ Ә бына тәүге симптомдарын тойоу менән ниндәй белгескә мөрәжәғәт итергә кәрәк?**

- Подаграны терапевтар һәм ревматологтар дауалай. Шулай уҡ диета тотоу мөһим әһәмиәткә эйә. Ҙур күләмдә пуриндар булған аҙыҡ-түлекте, тоҙ, хайуан майын ҡулланыуҙы кәметеү зарур. Күп итеп һелтәле һыу эсергә кәрәк, ашауҙы бер нисә өлөшкә бүлеп, аҙлап ашарға һәм төнгә күп ашамаҫҡа. Алкоголдә хатта әҙләп ҡулланыу ҙа ҡандағы һейҙек кислотаһы артыуға сәбәп булыуы күптән раҫланған. Бик күп ауырыуҙар артрит өйәнәген тап алкоголь ҡулланыуға бәйләй.

**➔ Сирҙе иҫкәртеү йәки ваҡытты үткәреп ебәреп, подагра менән интегеүселәр өсөн ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Ауырыуҙарға хәрәкәт әүҙемлеген арттырыу зарур, сөнки физик көсәргәнеш организмдан һейҙек кислотаһын сығара, ҡандағы липидтар күләме кәмей. Бөгөн тиҙлек заманында йәшәйбеҙ, күп нәмәгә өлгөрөп булмай, шулай ҙа, бушамауға һәм ваҡыт етмәүгә ҡарамаҫтан, көн һайын 7-8 сәғәт йоҡлау ҙа файҙалы. Әҙерәк йоҡлау организмдағы гормондар балансы боҙолоуға, артыҡ ауырлыҡҡа һәм һимереүгә килтерә. Медикаменттар менән дауалағанда, табиптар ҡандағы һейҙек кислотаһы күләмен түбәнәйтеүсе, уны организмдан тиҙерәк сығарыусы һәм ялҡынһыныуға ҡаршы препараттар тәғәйенләй. Шулай итеп, балансы, әммә артығын ашамау, шулай уҡ физик әүҙемлек был сир менән ауырымаҫҡа йәки уның аҙыуына юл ҡуймаҫҡа ярҙам итер.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

МЕДИЦИНА ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## НИНДӘЙ СИР КҮБЕРӘК?



Һуңғы йылдарҙа халыҡты диспансеризациялау, йәғни сәләмәтлектәрен планға ярашлы тикшереп тороу ниндәйҙер кимәлдә үҙ һүҙен әйтмәй ҡалманы. Былтыр, мәҫәлән, республика буйынса барлығы 733 мең кешенең 85 медицина ойошмаһында һәм күсмә медицина бригадаларында диспансеризация үтеүе һөҙөмтәһендә ҡан әйләнеше, эндокрин һәм бәүел-енес системаһы ауырыуҙары йышыраҡ осрауы асыҡланған. Тикшерелеүселәрҙең араһында 104,6 мең сирле теркәлгән. Шул иҫәптән ҡан әйләнеше ауырыуҙары беренсе урында тора (29 мең самаһы, 17,9 процент), икенсе урында - эндокрин системаһы - 25 меңдән ашыу осраҡ (24,1 процент), өсөнсө урында - бәүел-енес системаһы ауырыуҙары - 11,5 мең осраҡ (11 процент). Социаль сирҙәрҙән туберкулездың - 45, яман шештең - 490 (483 осраҡ раҫланып, пациенттар онкодиспансерға иҫәпкә ҡуйылған, ҡалғандары артабан тикшереү үтә), шәкәр сиренең - 1739, ҡан баҫымы күтәрелеүҙең -16 197, йөрәктең ишемик сиренең 4337 осрағы асыҡланған.

Быйыл 735 мең граждандың тикшерелеүе планлаштырыла. 1996, 1993, 1990, 1987, 1984, 1981, 1978, 1975, 1972, 1969, 1966, 1963, 1960, 1957, 1954, 1951; 1948, 1945, 1942, 1939, 1933, 1930, 1927 йылдарҙа тыуыусылар диспансеризация үтәсәк.

## ТИКШЕРЕҮ - БУШЛАЙ



Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауахана табиптары, онкосирҙәрҙе диагностикалау һәм дауалауҙың яңы ысулдарын индереү һөҙөмтәһендә, мейе яман шешен иртә стадияларҙа асыҡлай. Унда ҡуйылған махсус Перфузи программаһы менән йыһазландырылған МРТ аппараты ярҙамында бәләкәй генә шеште лә күрергә мөмкин. Табиптар билдәләүенсә, был ысул бигерәк тә химия һәм нурланыу терапияһы алыусылар өсөн бик мөһим, сөнки бындай дауаланыуҙан һуң мейелә булған үҙгәрештәр ҡабат шеш барлыҡҡа килгән кеүек күренә. Бөгөн был аппарат бары тик Ҡыуатов исемендәге РКБ-ла ғына бар. Бында республиканың төрлө райондарынан килгән пациенттарға ярҙам күрһәтелә. Былтыр барлығы 14 мең кеше тикшерелгән. Бындай процедураның уртаса хаҡы 12 мең булһа, республика халҡы өсөн ул бушлай.

## ҺӨҘӨМТӘЛЕ ЯҢЫ ЫСУЛ



Республика туберкулезға ҡаршы диспансер табиптары сирлеләрҙе дауалағанда яңы уникаль ысул ҡуллана. Ҡурылдайҙарҙы клапандар менән блоклау операцияһы үпкә туберкулезының еңел формаһын һөҙөмтәле дауалау мөмкинлеген бирә. Бронхоскоп ярҙамында үпкәнең зарарланған участкаһына махсус силикон ҡоролма урынлаштырыла. Ул ағзаның бер өлөшөн тын алыуҙан туктата. Һөҙөмтәлә, унан һыуы сыға, әммә кире инмәй. Үпкә күләме бәләкәйләнә, зарарлы урын ҡаплана һәм бөтәшә. Был ваҡытта үпкәнең сәләмәт өлөшө ғәҙәттәгесә эшләй. Бронхоблокатор организмда ике айҙан ярты йылға тиклем йөрөй ала. Уны ҡуйыу һәм алыу бер ниндәй ҡырҡыуһыҙ, урынлы анестезия ярҙамында башҡарыла һәм был ысул реабилитация ваҡытын кәметә.

Рәсәй ғалимы Арнальд Левин эшләгән был ысул әлегә бер нисә төбәктә генә, шул иҫәптән Башҡортостанда, ҡулланыла.

**"Башинформ"**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ИНСАНДАР БУЛАЙЫҠ!



**Дин - аҡыллы кешеләрҙе үҙ теләге һәм ихтыяры менән донъя һәм ахирәт бәхетенә өлгәштерә торған илаһи бер ҡанун. Уның өс өлөштән тороуы: Ислам, иман, ихсан хаҡында уйланып ҡына торорға тейешбеҙ. Ғәҙәттә, уның теүәл икеһенә - Ислам менән иманға иғтибар итеүсәнбеҙ (иғтибар итә алһаҡ әле). Ә бит мосолмандың дине лә, иманы ла әҙәм балаһында әҙәп, күркәм холоҡ тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуя. "Һинең динең ихсан кимәленә етергә тейеш", - ти бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с.**

Ихсандың төп мәғәнәһе - ғибәҙәттә лә, ғәмәлдә лә, бәндәләр менән булған мөнәсәбәттәрҙә лә Аллаһтың үҙен күреп торған кеүек эскерһеҙ була белеү. Ихсан - ул кешегә зыян килтерә торған бөтөн насарлыҡтарҙан баш тартып, изгелекле, яҡшы күңелле, миһырбанлы булыу. Үҙенең аҡыл һәм ҡул көсө, малы һәм ғилеме, йәмғиәттә тотҡан бәҫе менән ул Аллаһ ҡолдарына ярҙам итә, башҡаларға өлгө булырлыҡ итеп донъя көтә, ғүмер итә белә.

Күркәм холоҡ - ул Бәйғәмбәребеҙҙең әхлаҡи сифаты. Шул сифатты мосолман Унан ҡабул итеп алған, күңелебеҙгә лә, йәнгә лә туҡтауһыҙ шифа булып тороусы әҙәп сығанағына әйләндергән, әхлаҡи түбәнлектән ситтә булырға өйрәнгән. Бөгөн беҙ шуларҙың гел киреһен күрәбеҙ (әрләшеү, урлашыу, үлтереш һ.б.). Тормошобоҙҙағы әҙәпһеҙлек - ул бөтә насарлыҡҡа шар асып ҡуйылған ҡапҡаға оҡшаш. Шунан үтеп киткән кеше утҡа барып инә. Ҡөрьән: "Йәнен, күңелен паклап ҡына торған кеше ота, йән паклығын бар тип тә белмәгәндәр барыбер отола", - тип өйрәтә. "Тәҡүәлек - ул иң беренсе сиратта күркәм холоҡ", - тигән Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с.

"Бәлә нимә була?" тип һорағандар Бәйғәмбәрҙән. "Бер тин тормаған насар холоҡ!" тип яуап биргән Аллаһ илсеһе. Насар холоҡҡа миҫалдарҙы бик күп килтереп була. Мәҫәлән, ауылдарҙағы мәҙәни үҙәктәр иң әҙәпле, иң күркәм сифаттарға эйә булырға өйрәтеү мәккәһе булырға тейеш. Әммә улар шулаймы? Был йорттарҙа урын биләп эшләп йөрөүсе әҙәми заттар араһында төкөрәсәсәй тәмәке көйрәтеүселәрҙе лә, иҫерек йөрөүселәрҙе лә осратырға тура килә. Уларҙы нисек баһаларға? Уларға ҡарашыбыҙ ҡәтғи булырға тейеш. Күп мәртәбәләр иҫкәртеүгә лә иғтибар итмәй, закондың барлығын да белергә теләмәй икән - бындайҙарға сыҙап юл ҡуйып тороу үҙе үк әҙәпһеҙлекте, холоҡһоҙлоҡто үҫтереүгә булышлыҡ итеү, тип баһалана. Кешенең төп вазифаһы - ерҙең бер биҙәге була белеү. Насар холоҡ, әҙәпһеҙлеге менән башҡаларҙан айырылып торған кеше бәреп ватылған балсыҡ көршәккә оҡшаған, уны йәбештереп ҡуйырға ла мөмкин түгел, яңынан балсыҡҡа ла әйләндереп булмай.

Үкенескә күрә, бөгөн беҙ, мосолмандар, динебеҙҙе бик насар беләбеҙ. Шул арҡала башҡа халыҡтарҙың күсермәһенә әйләнеп бөтөп барабыҙ. Был тәртибебеҙҙә лә, кейенеүебеҙҙә лә, йәшәү рәүешебеҙҙә лә ныҡ сағыла. Бөйөк рус яҙыусыһы Л. Толстой "Һуғыш һәм солох" тигән ғәжәп бөйөк әҫәр, эпопея авторы: "Бөтөнөһө лә шулай эшләй, тигән һүҙҙәр менән алданыуға барабыҙ", - тигән. Ошо принципҡа һуҡырҙарса эйәреп, беҙ, мосолмандар ҙа иң ҙур юғалтыуҙар кисерәбеҙ.

Дәүләт тә, төрлө йәмәғәт ойошмалары ла, дини конфессиялар ҙа бер үк ерҙә йәшәйбеҙ, бөтөнөбөҙгә бер маҡсат билдәләнгән: халыҡты тәрбиәләү, уларҙың ерҙең биҙәге булып йәшәүҙәренә, телде, динде, ерҙе һаҡларға өлгәштереү. Шуның өсөн дәүләт чиновниктары ла дин ғилемен халҡыбыҙҙы тәрбиәләүҙә әүҙем ҡулланыу сараһын тапһа, дини ойошмаларҙы йәмғиәтебеҙҙең бер өлөшө итеп ҡараһа ине, тигән теләк белдерге килгәйне.

**Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ,**
**Ғафури районы Сәйетбаба ауылы имам-хатибы.**

ӘЙТЕМСӘЛӘР

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ



## Барыһы ла үҙебеҙҙән тора

Ни генә тимә, кеше һаулығы күбеһенсә үҙенән тора. Тәбиғәт, Хоҙай әҙәмгә һаулыҡты, ныҡлыҡты еткеле биргән. Кеше организмы ауырыуҙар, һаулыҡҡа төрлө хәүеф-ҡурҡыныстар менән көрәшергә шул тиклем һәләтле ул, тик шул көс-һәләтте эшкә ҡуша ғына бел. Тән, бөтә йән, һиҙеү ағзалары һәммәһе һине хәүеф-хәтәрҙәрҙән аралап, иҫкәртеп, аңғартып тора. Фәҡәт бер аҙ һаҡ, абай ғына бул.

* * *

Кеше ҡайғынан йыш ҡына буҫлығып илай.
Кеше нимәнәндер ҡай саҡ иңрәп ҡуя.
Яман асыуынан берәү һүгенеп ташлай.
Хәтәр ҡыҙып киткәндәр нәмәнелер ҡыйратып ырғыта.
Кемдер кемгәлер ҡул күтәреүгәсә барып етә.
Илау, иңрәү, һүгенеп ташлау, һауыт-һаба ватыу, ҡыҙып китеү - әҙәмдең үҙе абайламаҫтан уҡ эсендә йыйылғандарын ҡапыл тышҡа түгеп һалыуының бер ғәләмәте ул. Алама булһа ла уларҙың ваҡытында тышҡа түгелгәне хәйерлерәк.

* * *

Үпкәләгәнгә үпкә ашатырбыҙ, тиҙәр.
Үпкәләгәнде эсендә күп йөрөтмәй, үпкәләткәнгә ипле генә аңлатыу ҙа яҡшы дауа.

Ҡайғы-хәсрәттәреңде туған-тыумасаң, дуҫ-иштәрең менән бүлешеү ҙә күңелеңде бушата.
Үс-асыуыңды йәнһеҙ, зарарһыҙыраҡ нәмәгә төбәү ҙә ҡай саҡ хәлкәйҙәреңде еңеләйтә.
Күңел төбөбөҙҙә сиргә һабыштырырҙай төйөр-төйырҙарҙы һаҡламаһаҡсы.

* * *

Ниндәйҙер мәлһеҙ үлем, янғын, ҡырғын, мур, бүтән төрлө яман хәлдәр әҙәм өҫтөнә ябырылғанда, беҙҙең ата-бабалар "Хоҙай яҙғанылыр инде", "һуңғы ҡаза булһын" тип күңелдәрен күпмелер баҫа торған булғандар. Ҡөрьән-Кәримебеҙгә яҙылған ниндәй көслө рухи ҡағиҙә был. Юғиһә, шундай ауыр хәлдәргә ҡапыл йөрәктәр ярылырлыҡ бит.

* * *

Үҙ-үҙеңде тыя белеү, сабырлыҡ - ысындан да һары алтын ул. Тыйнаҡ сабырлығы менән кеше үҙ күңелен, йөрәген тәрән яраланыуҙарҙан аралай, ауыр ҡайғы-хәсрәттәрҙе еңелерәк үткәрә, ҡайғы диңгеҙен батырҙарса еңеп сыға, һаулығын, көсөн һаҡлап ҡала. Был көслө рухи һәләт, аҡыллылыҡ түгелме ни?

* * *

"Һап-һау булырға һәм оҙаҡ йәшәргә теләйһегеҙме? Теләһәгеҙ, шундай кәңәш бирәм: һис ҡасан һис кемгә лә бер ниндәй дәғүә белдермәгеҙ, самаһыҙ талаптар ҡуймағыҙ" - ти билдәле тикшеренеүсе С.Н. Лазарев. Был бик сәйер генә кәңәш кеүек. Нисек инде, һис ҡасан да һис кемгә лә бер ниндәй дәғүәһеҙ йәшәргә мөмкин? Самаһыҙ, ҙур талаптарҙан башҡа ла етеш тормош менән йәшәүе икелелер. Ул дәғүәнең, самаһыҙ ҙур талаптың үҙеңә ҡайтып, һаулығыңды бөтөрә, ғүмереңде ҡыҫҡарта, тип, карма принцибы менән аңлатмаҡсы быны.

Кеше донъяла дәғүәләрһеҙ, талаптарһыҙ йәшәй алмай. Әммә уларҙың аҡыллы, урынлы, тейешле булыуы шарт.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Әйтәйек, һеҙ ниндәйҙер кисәләһегеҙ һәм бында йыйылыусыларҙың береһен дә белмәйһегеҙ. Барыһы ла күңел аса, бер һеҙ генә тиҙерәк өйгә ҡайтыу тураһында хыялланып, ситтә торған кеүекһегеҙ. Әммә һеҙ өйҙә түгел. Һәм әлеге ваҡытта был хәл-торошто үҙгәртеп булмай икән, унан мөмкин тиклем файҙа алырға тырышығыҙ. Иң яҡшы ҡарар - беренсе аҙым яһау. Әңгәмәлә ҡатнашмаған берәйһен һайлағыҙ ҙа, ҡыйыу рәүештә уның эргәһенә барығыҙ. Уның да һеҙгә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәттә булыуына ышанығыҙ. Бик һирәк осраҡта ғына кеше дорфа булыуы мөмкин, ә бик йыш мөрәжәғәтте йылы һәм асыҡ ҡабул итәләр. Барлыҡ ҡыйыулығығыҙҙы туплап, уңайһыҙлыҡ һәм оялсанлығығыҙҙы еңһәгеҙ, яңы танышығыҙ менән уртаҡ темалар табып, рәхәтләнеп һөйләшә аласаҡһығыҙ. Дуҫтарса мөнәсәбәттә булығыҙ һәм әңгәмәнең үҙ яйына барыуына юл ҡуйығыҙ.

## Донъяуи әңгәмә сәнғәтенә өйрәнегеҙ

Бар әңгәмәләр ҙә аҡыллы һәм философик булырға тимәгән. Таныш түгел кеше менән һөйләшеүҙе донъяуи әңгәмәнән башларға ла мөмкин. Бының сәбәптәре лә бар. Кем менән дә булһа танышаһығыҙ икән, әңгәмәсегеҙ һеҙҙең ихласлыҡты күрергә тейеш. Тәүге һүҙҙәрегеҙ үк был һорауға яуап бирә һәм кешелә тәьҫорат тыуҙырып, артабанғы әңгәмәне кәрәкле юҫыҡҡа бора. Әгәр, мәҫәлән, кешенән уның тормош философияһы тураһында һораһағыҙ, шунда уҡ ҡурҡытасаҡһығыҙ. Әгәр уға уның үҙе тураһында һорауҙар бирһәгеҙ, ул көсөргәнештән арыныр һәм әңгәмә үҙ яйы менән дауам итер. Әгәр ҡасан да булһа телевизион ток-шоу ҡараһағыҙ, моғайын да, алып барыусының һорауҙарының һәр ваҡыт ябай, ентекле һайлап алынған булыуын һәм саҡырылған ҡунаҡҡа төбәлгәнен күрерһегеҙ. Алып барыусы шулай итеп уның шәхес булараҡ ҡыҙыҡлы икәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Бындай һорауҙар көсөргәнеште бөтөрә, кешегә үҙе тураһында һөйләү мөмкинлеге бирә.

## Йылмайығыҙ

Аралашҡанда күптәрҙең тағы бер етди проблемаһы бар - улар бик аҙ йылмая. Күҙәтеп ҡарағыҙ: тирә-яҡтағылар йыш йылмаямы? Ҡайһы берәүҙәр йылмайыуҙы эшләпә кеүек, кейеп-сисеп ала, әммә уларҙың ихлас булмауы күренеп тора. Университеттарҙың береһендә үткәрелгән тикшереү һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙың 70 процентына һәм үҙҙәре аралашҡан 12 процент ир-атҡа йылмая. Был уларҙы ир-ат әңгәмәселәрҙең фекере түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙарға яһаған тәьҫире ҡыҙыҡһындырыуы тураһында һөйләй. Йылмайыу - әңгәмәләшеүҙең мөһим өлөшө, сөнки ул тирә-яҡтағыларға йоғонто яһай. Күҙ алдына килтерегеҙ әле, һеҙгә берәйһе йылмайһа, нисек күңелле. Был кешегә барыһы ла һәйбәт һәм уны күреүгә шат булыуығыҙҙы аңлатыуҙың иң ябай ысулы. Кеше йылмайыуға ҡаршы тора алмай. Әгәр һеҙ йылмайыу буйынса белгес түгел икән, белгес булырға тырышырға кәрәк һәм тиҙерәк. Бына әле үк йылмайығыҙ! Был ауыр түгел. Өҫтәүенә, йылмайыу кәйефте күтәрә. Әгәр эргәгеҙҙә көҙгө бар икән, уға ҡарап йылмайығыҙ һәм үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тойоуығыҙҙы күрерһегеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Рәми Ғариповтың маҡтаулы исемдәре лә, наградалары ла булманы. "Башҡортостандың халыҡ шағиры", Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты исеме - быларҙың барыһы ла уға үҙе үлгәндән һуң бирелде.*

СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ, ӘҘӘБИӘТ

# ШАҒИРҒА ҺӘЙКӘЛ



**Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа һәйкәл ҡуйыла. Хәлит Ғәлиуллин яһаған скульптура ҡала хакимиәтендә килешеүҙең икенсе этабын үтте. Был хаҡта социаль селтәрҙә ҡала Советы депутаты Артур Хажиғәлиев хәбәр итте.**

"Уң ҡулына китап тотҡан, шиғыр уҡыған килеш һүрәтләнгән шағир һәйкәле 2017 йылдың өсөнсө кварталында "Башинформсвязь" бинаһы һәм "Родина" кинотеатры араһында ҡуйылыр тип күҙаллана. 1 сентябргә өлгөртһәк, яҡшы булыр ине", - тип хәбәр итте сығанаҡ.

Бынан 40 йыл элек, 1977 йылдың 20 февралендә, шағир йөрәге тибеүҙән туҡтаны. Тере сағында Рәми Ғариповтың маҡтаулы исемдәре лә, наградалары ла булманы. "Башҡортостандың халыҡ шағиры" тигән юғары исем, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты исеме - быларҙың барыһы ла уға үҙе үлгәндән һуң бирелде һәм халыҡтың шағирға ҡарата һөйөүе символына әүерелде. Әҙип еңел булмаған заманда туған телендә ижад итеү, үҙ халҡына мөрәжәғәт итеү, дөрөҫлөктө еткереү хоҡуғын яҡланы.

# ЕҢЕҮСЕ - ӨФӨНӘН!



**Рөстәм Шәрипов исемендәге Республика ҡурайсылар конкурсы үҙенең еңеүселәрен билдәләне.**

Икенсе тапҡыр үткәрелгән бәйгелә 110 музыкант ҡатнашты. Конкурста ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киңәйгән быйыл, Краснокама, Йылайыр, Әлшәй, Илеш, Күгәрсен, Благовар, Иглин, Миәкә, Өфө, Туймазы, Әбйәлил, Ҡырмыҫҡалы, Балаҡатай райондары, Нефтекама, Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай ҡалаларынан, Ырымбур өлкәһенән ҡурайсылар килгәйне.

Һөҙөмтәләр буйынса бәйгенең Грин-приһы "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбленең 26 йәшлек ҡурайсыһы Морат Йәноҙаҡовҡа тапшырылды. Ул башҡорт халыҡ көйө "Ҡолой кантон"ды һәм Нур Дауытовтың "Яңғыҙлыҡ" пьесаһын башҡарҙы.

Конкурс бер турҙа үтте. Бәйгеселәр өс йәш категорияһында - 12 йәшкә тиклемгеләр, 12-16 йәштәгеләр, 16 йәштән 35 йәшкә тиклемгеләр араһында көс һынашты.

# ЛОНДОНДА ЛА БЕҘҘЕКЕЛӘР!



**Опера йырсыһы, милләттәшебеҙ Әлфиә Кәримова Лондонда үҙенең соло-концерты менән сығыш яһаны. Унның концерты IV "Альбион йондоҙҙары. Масленица" халыҡ-ара башҡарыу оҫталығы фестиваль-конкурсын асты.**

"Альбион йондоҙҙары" проекты Рәсәйҙең Лондондағы фән һәм мәҙәниәт үҙәге, Бөтә донъя башҡарыу сәнғәте ассоциацияһы ярҙамында "Музыка Нова" халыҡ-ара музыка академияһында һәм Рус мәҙәни үҙәгендә ойошторолдо. Йыл һайын уҙғарылған конкурс төрлө илдәрҙең мәҙәниәттәрен яҡынайтыусы күпер булып тора. Сара Рәсәй мәҙәниәтен һәм мәғарифын популярлаштыра, һәләтле ватандаштарыбыҙға, шулай уҡ бөтә донъя илдәре артистарына үҙ талантын күрһәтергә мөмкинлек бирә.

"Тамашасылар рус музыкаһы шедеврҙарын ихлас тыңланы. Концертҡа бик күп ватандаштарыбыҙ килгәйне, сит ил тамашасылары ла бар ине, улар рус телен аңламаһалар ҙа, концерттан һуң килеп, үҙҙәренең һоҡланыуын белдерҙе", - тип һөйләне йырсы.

Әлфиә Кәримова - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Астана-Опера" театры (Ҡаҙағстан) солисткаһы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты, "The Opera Ball Award-2015" абруйлы наградаһының "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ тауышы" номинацияһында еңеүсе, халыҡ-ара бәйгеләрҙә жюри ағзаһы, педагог. Тиҙҙән өфөләр ҙә яратҡан йырсыһын тыңлай аласаҡ. 20 мартта Башҡорт опера һәм балет театрында Әлфиә Кәримова Дж. Вердиҙың "Травиата" операһында Виолеттаны йырлай.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Февраль - март (Йомадиәл әүүәл - Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (30) дүшәмбе | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 28 (1) шишәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 1 (2) шаршамбы | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 2 (3) кесе йома | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 3 (4) йома | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 4 (5) шәмбе | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 5 (6) йәкшәмбе | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ЕТӘКСЕЛӘР ҘӘ... ЙЫРЛАЙ



**"Башҡортостан" концерт залында Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм муниципаль власть органдары хеҙмәткәрҙәре араһындағы үҙешмәкәр смотрҙың Гала-концерты үтте.**

Төрлө ойошмалар, предприятиелар, учреждениелар коллективтары араһында мәҙәни һәм эшлекле бәйләнештәрҙе нығытыу маҡсатынан үткәрелә башлағайны был сара. Былтыр декабрь айында республика смотрының һайлап алыу туры уҙҙы, унда - 49 муниципаль, 11 дәүләт власть органдары коллективы ҡатнашты. "Һинең менән ғорурланам, Башҡортостан!" тип аталған был смотрҙы Башҡортостандың халыҡ артисы Әхтәм Абушахманов етәкселегендәге абруйлы баһалама ағзалары ҡараны.

Гала-концентта БР Финанс министрлығы, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министрлығы, Иглин, Мәсетле, Благовар, Ҡырмыҫҡалы, Краснокама, Учалы, Тәтешле, Бөрйән, Йәрмәкәй, Борай, Өфө, Балтас райондары, Өфө, Нефтекама, Стәрлетамаҡ ҡалалары хакимиәттәре ҡатнашты. 1-се урын Борай районы хакимиәтенең "Етеҙ Танып" вокаль ансамбленә, Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәтенең бейеүселәр дуэтына, Өфө районы хакимиәте хорына, Мәҙәниәт министрлығының бүлек етәксеһе Рита Бигловаға, Мәсетле районы хакимиәтенең бейеү ансамбленә, Өфө ҡалаһы Киров районының физик культура һәм спорт комитеты рәйесе Артур Әлибәковҡа, Бөрйән районы йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Ирек Шәмиғоловҡа, Нефтекама ҡалаһы хакимиәте белгесе Әлиә Тәкиуллинаға, Благовар районы хакимиәтенең инструменталь дуэтына тапшырылды.

# МӘСКӘҮҘӘ БЕЙЕНЕЛӘР



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Мәскәүҙә Чайковский исемендәге концерт залында сығыш яһаны.**

Мең ярымлыҡ залда коллективтың иң яҡшы бейеүҙәре ингән "Донъя халыҡтары берҙәмлеге" программаһы тәҡдим ителде. Артистар баш ҡала халҡына яңы ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, ҡытай, мари бейеүҙәрен бүләк итте. "Тархандар", "Ете ырыу" яңы башҡорт постановкаларының премьераһы уҙҙы. Артистар Ҡара диңгеҙ өҫтөндәге ТУ-154 авиафажиғәһендә һәләк булғандарҙы иҫкә алды. "Һалдат бейеүе" Александров исемендәге ансамбль артистары иҫтәлегенә арналды, улар менән ғәскәровсыларҙы тығыҙ ижади һәм дуҫлыҡ membership еп... 

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Февраль айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Фирҙәүес Мараҡанова, **Учалы районы** Миндәк ауылынан Ғәйшә Хәмзина, Мәрүәр Даутова, Гөлнур Ильясова, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Илдар Килмөхәмәтов, Уральск ауылынан Рәзилә Исҡужина, **Баймаҡ районы** Темәс ауылынан Сәлимә Ишбулатова, Вәкил Ишбулатов, Мерәҫ ауылынан Нәсилә Дауытбаева, Ҡолсора ауылынан Алмабикә Йомағужина, Ниғәмәт ауылынан Г. Рыҫмөхәмәтова, **Әбйәлил районы** Йәнекәй ауылынан Нәйлә Нафиҡова, Мәләүез ҡалаһынан Зөлфәт Ғәлиев, **Өфө ҡалаһынан** Әминә Исмәғилева, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Фәниә Шәрипова, **Сибай ҡалаһына**н М. Ғәйетбаев, **Ейәнсура районы** Новопавловка ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ныҡлы сәләмәтлек, бәрәкәтле оҙон ғүмер теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**26 февраль "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+

**28 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**28 февраль "Ут биреп торған сағым"** Артур Кәбировтың концерты

**1 март "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+

**2 март "Ғәфү ит мине"** (И. Герман), мелодрама 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 февраль "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия 12+

**28 февраль "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

**1 март "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), уйланыуҙар. Башлана 15.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 февраль "Барыһы ла йөрәгемә һыя..."** Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Ғариповтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған музыкаль-поэтик кисә 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 февраль "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+

**26 февраль "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 февраль "Гонаһлы хыялдарым"** (Ф. Ғәлимов), комедия 16+

**26 февраль "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраканцев). Башлана 12.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 февраль "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. Башлана 12.00 0+

✓ *"Әгәр ҙә һинең лайыҡлы тормош өсөн аҡсаң етә икән, байлыҡ артынан ҡыуып, ваҡыт уҙғарма. Йәшә! Минең аҡсаларым ғүмерҙең хатта бер генә сәғәтен дә һатып алырға ярҙам итә алманы..."*



ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# РӘХМӘТЛЕ БУЛЫУ -

## яҡшы кәйефтең нигеҙе



**Кешене белгең килһә, бер һүҙенә ҡара, бер эшенә ҡара, ти халыҡ. Әңгәмәсебеҙ - башҡорт эстрадаһының иң тырыш йырсыһы, ул шәп ҡурайсы ла, актер ҙа, үҙен республика кимәлендәге сараларҙың алып барыусыһы булараҡ та танытып өлгөрҙе. Эшләгән эштәрен күреп йөрөйбөҙ, һүҙ ҙә һөйләтеп алайыҡ, тип, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәғиҙулла БАЙЕГЕТкә мөрәжәғәт иттек. Беҙҙән - һорауҙар, унан тапҡыр яуаптар.**

**➔ Үҙегеҙҙе үҙегеҙ яңы көнгә, күтәренке кәйефкә, ниндәйҙер эштәргә, киләһе юғарылыҡтарға дәрләндерәһегеҙме?**

- Минең иртә таңдан тороп, сәләмәтлекте нығыта, кәйефте күтәрә торған күнекмәләр эшләү ғәҙәтем бар. Улар Норбековтың үҙенсәлекле системаһына ҡоролған. Күп тигәндә, 15 минут ваҡытты ала, ә бына һөҙөмтәһе иҫ киткес. Күнекмәләрҙе ас ҡорһаҡҡа башҡарырға кәрәк. Ҡул, аяҡ һәм умыртҡа һөйәктәрен әкренләп ҡуҙғатаһың һәм артабан хәрәкәттәрҙе көсәйтә бараһың. Хәҙер мин гәзит уҡыусыларға был күнегеүҙәрҙең иң ҙур көсөн һәм серен асам - файҙаһы тейһен тиһәң, ауыҙ мөмкин тиклем йырыҡ булырға тейеш. Тормошоңда булған иң ҡыҙыҡ ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерәһең. Һәм тағы ла - умыртҡа бағанаһы уҡлау йотҡан кеүек туп-тура булырға тейеш. Мин был күренеште "Фидан ағай торошо" тип йөрөтәм. Иҫләгеҙ әле, Фидан Ғафаров һәр саҡ кәүҙәһен тура тота, ғорур, хатта бер аҙ текә баҫып йөрөй, әртис - бахыр түгел, тигәнерәк ҡарашы ни тора!

Иртә менән күп ашамаҫҡа тырышам. Ризыҡтарҙан йышыраҡ бутҡалар ҡулланам. Улар араһында һоло ярмаһы - иң шәбе. Шулай уҡ намаҙ уҡыу, Аллаһы Тәғәләне һәр саҡ иҫтә йөтөрөү - беҙҙең төп бурысыбыҙ. Барыһы ла, тәү сиратта, Унан. Рәхмәтле булыу - яҡшы кәйефтең иң үрге баҫҡысы.

**➔ Холҡо, ҡылыҡтары, тышҡы ҡиәфәте менән һеҙҙе ҡабатлаған һыңарығыҙ булһа, уның менән дуҫлашыр инегеҙме?**

- Һинең ижадыңды үлеп һөйгән, йәиһә тышҡы ҡиәфәте менән ниндәйҙер оҡшашлығы булған һәм шуға ла һинең кеүек, булдыра алам, тип яңылышып, ҡаңғырып йөрөгән кешеләр осрап ҡуя ул. Ундайҙар осрашҡан саҡта үҙен ҡыйыу тота, хатта үҙен һинең менән тиң ҡуя, һин булып ҡыланырға тотона. Дөрөҫөн әйтәм, был миңә оҡшамай. Элегерәк "Аҙна" гәзитендә бәйге була торғайны, унда тышҡы ҡиәфәте йырсыларға, актерҙарға оҡшаған кешеләрҙе ҡатнаштырып, еңеүсеһе һинең менән осрашыу форматындағы бүләккә лайыҡ була ине. Әлеге көндә бындай танышыуҙар бер кемгә лә ҡыҙыҡ түгел, минеңсә. Һәр кеше үҙенсә яратылған, бер кем дә икенсе кешегә тулыһынса оҡшай алмай. Был мөһим дә түгел хатта...

Был һорауҙы фәндең кеше клонын яһай алыуына бәйләгәндә, ҡыҙыҡ булыр ине, тик бит ул үҙен Сәғиҙулла тип таныясаҡ. Уға кем ысын Сәғиҙулла икәнен аңлатып булмаясаҡ бит. Әгәр ул робот булһа, йомошфәләнгә ҡулланырға булыр ине, мәҫәлән. Шулай ҙа мосолмандарҙа был ҡәтғи тыйыла. Шуға күрә ғаиләм, дуҫ-иштәр, туғандар өсөн берҙән-бер булып йәшәй бирәйем әле.

**➔ Мөмкинлек булһа, билдәле кешеләрҙең кемеһе менән рингта осрашып, алышыр инегеҙ?**

- Әлеге мәлдә һеҙҙе 11 апрелдә "Башҡортостан" концерт залында үтәсәк йырлы "ринг" көтә. Унда миңә ҡаршы Фиданыч, йәғни, Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Ғафаров сығасаҡ. ВАА һәм ВНА версиялары буйынса донъя чемпионын билдәләйәсәкбеҙ. Күрәһең, бындай алыш Башҡортостаныбыҙҙа тәүгеһелер. Шунан ары, дәғүәсемде ҡыйратҡас, күҙ күрер. Бәлки, тағы берәйһе мине алышҡа саҡырыр. Ҡыҫҡаһы, барыһы ла алда әле.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ

# БӨЙӨК ИЖАДҠА ҺУҠМАҠ...



**Бөйөк рус йырсыһы Федор Шаляпиндың музыкаль карьераһы Өфөлә башлана. Ул йәшәгән Гоголь урамындағы 1-се йорт бөгөнгө көндә лә һаҡланған.**

Шаляпин 1873 йылда Ҡаҙанда земство идаралығы писаре ғаиләһендә тыуған. Әммә дүрт класс белеме булған, итексе өйрәнсеге булып йән аҫырарлыҡ аҡса эшләгән һәм сиркәү хорында йырлап йөрөгән Шаляпин өсөн сәнғәткә юл тап Өфөлә асыла.

1890 йылда Өфөгә барыу өсөн тупланған Семенов-Самарский труппаһы йәш Федорға тормошон үҙгәртеү мөмкинлеге аса. Был ваҡытта уға 17 йәш була. Бер эштән дә ҡурҡып тормай, лампа ла таҙарта, сәхнә лә һеперә, декорациялар ҙа ҡора. Федор бер кер йыуыусының подвалда урынлашҡан бүлмәһендә йәшәй. "Театрҙы бер күңел асыу сараһы итеп кенә күрһәм дә, сәнғәткә хеҙмәт итә алыуым менән сикһеҙ ғорурлана инем", - тип яҙа ул аҙаҡтан.

Йырсы булараҡ тәүге дебюты 1890 йылдың 26 ноябрендә, А. Замараның "Певец из Палермо" тип аталған операһында була. Шаляпин унда хорҙа йырлай. Өфөлә уның тәүге афишаһы ла сыға, бер данала булған был афиша ла хәҙерге көнгә тиклем һаҡланған. "Беренсе тапҡыр бындағы сәхнәлә. "Галька" рус комик операһы һәм опереттаһы, 1890 йыл, 18 декабрь" тип яҙылған була унда һәм Шаляпиндың исеме актерҙар араһында күрһәтелә. Был осраҡлы рәүештә килеп сыға, актерҙарҙың береһе сығыш яһауҙан баш тарта һәм Федор уны алыштырып тора. Бынан һуң уға күберәк эш хаҡы түләй һәм башҡа ролдәргә саҡыра башлайҙар. Миҙгел аҙағында тамашасы уны баш ҡалала ҡалырға өндәй, әммә ул Өфөнән китә.

Бер нисә йылдан һуң Шаляпинды С. Мамонтов Мәскәү шәхси операһына саҡыра, ул унда халыҡ һөйөүен яулай. 1899 йылдан Ҙур һәм Мария театрҙары солисы булараҡ, Федор Шаляпин сит илдәргә гастролдәргә сыға башлай. 1922 йылдағы сираттағы гастролдәре башта байтаҡҡа һуҙыла һәм эмиграцияға әйләнә, Рәсәйҙә уға башҡа сығыш яһарға тура килмәй.

Шаляпин Өфөлә бер йылға яҡын йәшәй, әммә был ҡала уның ижади тормошонда ҙур урын биләй. "Страницы моей жизни", "Маска и душа" тип аталған автобиографик китаптарында ул был осорҙо бик йылы итеп хәтергә ала.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺИМЕҘЛЕКТЕ ҠУЙ КҮТӘРЕР,

## ауырлыҡты ир күтәрер

Ҡаланың тауығы булғансы, ауылдың әтәсе бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Сәйәсәт - ул башҡа төрлө саралар менән һуғышты дауам итеү.

**(Во Нгуен Зиап).**

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла ебәргән хата ҡағыҙға әүерелә.

**(Андре Мальро).**

Ҡатын-ҡыҙҙар йәшен һанамай. Уның өсөн быны әхирәттәре эшләй.

**(Юзеф Булатович).**

Иҫке гәзиттәрҙе генә уҡырға кәрәк. Ун йылдан һуң уларҙа яҙылған бөтөн насар яңылыҡтар көлкө тыуҙырасаҡ.

**(Жан Ануй).**

Мин үҙемдең көйөнөүҙәремде һәр ваҡыт дошмандарыма һөйләйем, улар ғына мине иғтибар менән тыңлай белә.

**(Роберт Орбен).**

Еңеү нәфрәт тыуҙыра; еңелгән кеше хәсрәт менән көн итә. Еңеүҙәрҙән һәм еңелеүҙәрҙән баш тартып, тыныс йәшәүҙе һайлағандар ғына бәхетле ғүмер кисерә.

**(Будда).**

Теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ҡыҫҡа һәм оҙон юл бар.

**(Зигмунд Фрейд).**

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше йылдар буйына үҙен бар нәмәнән сикләп аҡса йыйған. Берҙән-бер көндө уға шундай уй килә: бер йыл буйына үҙен бер нәмәнән дә сикләмәйенсә йәшәп ҡарарға кәрәк. Тик көтмәгәндә уның алдына Үлем килеп баҫа. Кеше төрлө сәбәптәр килтереп, Үлемдән тағы ла бер аҙ йәшәргә үтенеп һорай, ялбара икән, тик ул ишетергә лә теләмәгән. "Миңә өс көн булһа ла йәшәргә мөмкинлек бир, мин һиңә байлығымдың яртыһын бирермен", тигән кеше. Үлем уны ишетмәгән дә хатта. "Ярай, миңә бер генә көн булһа йәшәү бир, мин һиңә йылдар буйына үҙ көсөм менән йыйған бар байлығымды бирәм". Үлемде күндереп булмаған. Үлем алҡымынан алғас, кеше ҡағыҙ битенә ошо һүҙҙәрҙе генә яҙып өлгөргән: "Әгәр ҙә һинең лайыҡлы тормош өсөн аҡсаң етә икән, байлыҡ артынан ҡыуып, ваҡыт уҙғарма. Йәшә! Минең аҡсаларым ғүмерҙең хатта бер генә сәғәтен дә һатып алырға ярҙам итә алманы..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 363/02